# ҺӘНӘК 6

✦ ИЮНЬ ✦ 2009 ✦

БЫЛ ҺАНДА:

ӘБЕЙ-БАБАЙ ҺАБАНТУЙЫ
2-3-сө биттәр

Башың эшләһә...
20-21-се биттәр




**– Оло ҡунаҡ өсөн махсус рәүештә музейҙан килтерттек.**

– Для высокого гостя специально доставили из музея.

А. АНДРЕЕВ

Юнир САЛАУАТОВ

# Һабантуйҙа

**(Ауылдан хат)**

Һаумы, ҡыҙым! Һиңә ҡайнар сәләмдәр менән хат яҙа әсәйең. Беҙҙең хәлдәребеҙ элеккесә – сирләгәнебеҙ юҡ. Хәҙер ауыл хәлдәрен яҙып үтәйем. Үҙең беләһең, ҡыҙым, ауылдағы йәштәр китеп бөттө. Беҙ ҡарт-ҡоролар ғына тороп ҡалдыҡ.

Күрше Хәкимә әбей ғүмерендә беренсе тапҡыр кейәүгә сыҡты. Туйын уҙғарҙыҡ. Туй күңелле үтте. “Горько!”– тип ҡысҡырҙыҡ. Тик кейәү булған Айҙар бабай баҫып торған килеш ҡунаҡтарға күрһәтеп үбешә алманы, оялды. Ятып, юрған аҫтында үбештеләр.

Йәштәр юҡ, тип борсолоп йәшәмәйбеҙ. Кисә һабантуй уҙғарҙыҡ. Район үҙәгендәге йәштәр футбол командаһын ярышҡа саҡырҙыҡ. Мин – үҙәк, Кәримә әбей – уң яҡ, Сәлимә әбей һул яҡ һөжүм итеүсеһе булды. Сәғит бабайҙы үҙебеҙҙең ҡапҡаны һаҡлаусы итеп, ҡапҡа алдына матрас йәйеп, шунда һалып ҡуйҙыҡ. Сөнки ғүмере буйы тәмәке тартты. Йүгерергә хәле юҡ.

Тегеләрҙең һөжүм итеүсеһенә, әгәр ҙә мәгәр беҙҙең ҡапҡаға гол типһәң, армиянан ҡасып йөрөүең хаҡында жалоба яҙабыҙ, тинек. Тыңланы – уларҙы алтыға биш менән еңдек. Алтыға нол булыр ине, Фәрзәнә әбей ҡайһы ҡапҡа беҙҙеке, ҡайһы ҡапҡа тегеләрҙеке икәнде айыра алмай йонсоно. Ҡайһы ҡапҡаға яҡынлай, шуға гол индерә лә ҡуя. Үҙ ҡапҡабыҙға биш гол индерҙе бит. Өҫтәүенә, беҙҙең ҡапҡаны һаҡлаусы Сәғит бабай ул типкән туптарҙы тотманы. Баҡтиһәң, уға күҙе төшөп йөрөй икән.

Икенсе таймда Кәримә әбей тегеләрҙең ҡапҡаһына типкән ине, ҡапҡаһы Мөнир осоп килгән тупты тотоп та алды, туп менән бергә тәгәрәп барып, ҡапҡаларына инеп тә китте. Аңын юғалтып, егерме минут ятты. Баҡтиһәң, Кәримә әбейҙең, туп типһә, удары смертельный икән. Элек колхоз заманында ул сөгөлдөр үҫтереүсе булды. Сөгөлдөр баҫыуына йүгереп бара ине лә йүгереп ҡайта ине. Бына шунда аяғы көслө булып сыныҡҡан икән. Артабан, уң аяғына ҡалып кейҙереп, һул аяғы менән генә уйнаттылар.

Һабантуйҙа тағы бағана башына менеү булды. Иң осҡа эленгән итекте Сәфәр бабай менеп алды. Ул бағана башына менеп тә етте, джинсыһының төбө йыртылып та китте. Оялыуынан башҡаса ергә төшмәне. Кешеләр таралғансы шунда ултырҙы, әбейе ашарына мендереп бирҙе.

Һабантуйҙа концерт та ҡуйҙыҡ. “Танец живота” тигән ғәрәп бейеүен “Ҡорһаҡ бейеүе” тип Мәрхәбә әбей булыштырҙы. Элек ҡыҙ сағыбыҙҙа бейегән “Ете ҡыҙ” бейеүен “Ете әбей” тип иғлан итеп башҡарҙыҡ. Күҙҙәр йүнләп күрмәй, ҡолаҡтар музыка тауышын ишетеп еткермәй. Шуға, бейеү хәрәкәттәрен яңылышып ҡуймайыҡ, йығылып китмәйек тип, бер-беребеҙҙең итәгенә йәбешеп бейенек. Атайымдың тәүге бисәһе Мәхмүзәнең танауы әрмән танауы кеүек ҙур. Мин уның танауына тотондом. Элекке әбейҙәрҙең “Әхирәттәр” тип аталған йыр ансамблен, булғас заманса булһын, дөрөҫкә тура килһен өсөн “Самогонсылар” тип исем ҡушып, сығыш яһаттыҡ. Мөхәббәт йырҙарын, заманса итеп, “сексуаль йырҙар” тип иғлан иттек. Яҙғас шуны ла яҙайым,




**– Бөтә районға бер алаша ғына ҡалған.**
– На весь район лишь одна кляча осталась.

ҡыҙым, элек һөйләшкәндә “матур итеп кейенергә кәрәк”, тип һөйләшә инек. Хәҙер “сексуаль итеп кейенергә кәрәк”, тип һөйләшәбеҙ.

Концертта ҡатнашыусылар күп булды. Сәмиғә әбей “Һуңлап килгән мөхәббәт” йырын “Һуңлап килгән секс”, тип йырланы. Шунан бабайы: “Мин һиңә һуңлап килдемме? Ун биш йәшеңдә үк ғашиҡ булдым. Ун һигеҙ йәшеңдә ауырға ҡалдырҙым. Бөтәһе лә по-порядку булды!”– тип, әбейенә ҡаршы политик сығыш яһап, “Яратам һине” тигән йыр башҡарҙы.

Һабантуйҙы уҙғарып ебәргәс, драма түңәрәге ойошторҙоҡ. “Ғәлиәбаныу” тигән спектакль ҡуясаҡбыҙ. Ғәлиәбаныуҙы Сәмиғә әбей, Хәлилде Хәсән ҡарт уйнай. Хәсән ҡарт бер тапҡыр репетицияға килде лә башҡаса күренмәне. Әбейе Ғәлиәбаныуҙан көнләшеп, психланып, өйөндә бола ҡуптарып, һауыт-һабаларын ҡырып бөтөргән.

Ауылыбыҙҙың матурлығын һаҡлайбыҙ тип, беҙ, ҡарт-ҡоролар, йәш сағыбыҙҙағы кеүек, кис урам буйлап гармун уйнап, йырлашып уҙабыҙ. Егет, ҡыҙ булып бабайҙар әбейҙәрҙе өйҙәренә оҙатып ҡуйған булалар. Кисә минең арттан Кәшәф бабай килде таяғына таянып. Күҙе йүнләп күрмәгәс, шунан мин уны оҙаттым. Егет кеше ҡыҙҙы өйөнә индереп ҡуйырға тейеш, тип ул мине тағы оҙатты. Шулай итеп бер-беребеҙҙе оҙатышып, таң атҡансы ете рейс яһаныҡ. Атайың Кәбирә әбей артынан китте. Улар ауыл осондағы күл буйына барғандар. Ҡайтырға хәлдәре бөтөп, таң атҡансы ҡайын төбөндә ятҡандар. Иртән трактор менән барып алдыҡ.

Ҡартлыҡ менән артыҡ эш ҡырып булмай. Хәҙер ауылда мал-тыуар, ҡош-ҡорт тотоусылар бөттө. Баҡырышып-мөңрәшеп көтөүгә барған малдар юҡ. Әтәс ҡысҡырған, эт өргән тауыштар булмағас, ауылда матурлыҡ та юҡ. Шул матурлыҡты һаҡлайыҡ тип, атайың таң атҡанда бөтөн ауылға әтәс булып ҡысҡыра. Айҙар бабай эт булып өрә. Фәриҙә, Мәғфирә әбейҙәр ағас башына менеп, һандуғас булып һайрайҙар. Ғүмере буйы тәмәке тартҡан Мотаһар бабай ҡарға булып ҡарҡылдай. Хәҙисә әбей бейә булып туғайға сыға, бабайы айғыр булып кешнәй.

Ҡыҙым, беҙҙең ғаиләлә ҙур үҙгәреш булды. Атайың йәш бисә алды. Ҡаршы килмәнем. Был беҙҙең башҡорттарҙың элекке йолаһы. Насар хәл түгел. Яңынан балалар тыуҙырып, ауылды йәшәртеп ебәрәсәкбеҙ. Атайыңа ышанысым ҙур. Уның орлоғо высший сорт. Йәш бисә махом ауырға ҡалды. Ниңә риза булдың, тип мине ғәйепләмә. Мин, ҡыҙым, ғаиләлә главнокомандующий. Мин оло, аҡыллы бисә.

Бына шулай, ҡыҙым, ауылыбыҙ шаулай, гөрләй. Ярай, хушһау бул, хат көтөп, әсәйең Гөлғәйшә.

## Элеп алдым, һелкеп һалдым

### “Шартлы күренеш”

(2-се һан)

**Учалы районының Озёрный ауылында тәбиғи газ үткәреү башланған да, ярты юлда ташланған икән. Ошо турала журналда хат баҫылғайны.**

**“2002 йылда “Планета” төҙөлөш ойошмаһы планға индерелер тигән өмөт менән Озёрный ауылының бер урамында газ үткәрә башлай. Ләкин ойошманың өмөттәре аҡланмай. Шунлыҡтан был эш туҡтатыла. 2008 йылда ауылдарға газ үткәреү “Газ-Сервис” асыҡ акционерҙар йәмғиәтенә тапшырыла. Был ойошманың “Учалыгаз” филиалы Озёрный ауылына газ индереүҙе республиканың 2009 йылдың бюджетын финанслау планына индереүҙе һорап, мөрәжәғәт итте,” – тип яуап бирҙе “Учалыгаз” филиалы директоры Д. Кәримов.**

### “Юғалған юл”

(2-се һан)

**Саҡмағош районының Ташҡалмаш ауылындағы юлдарҙың насарлығы “Һәнәк” йәптәренә эленгәйне.**

**Саҡмағош районы муниципаль район хакимиәте башлығы Р. Йосопов беҙгә Бәшир ауылы биләмәһендә юл һәм баҫмаларҙы йүнәтеү эштәре барышы хаҡында хәбәр итте. Ташҡалмаш ауылы юлдарын рәткә килтереү ағымдағы йыл планына индерелгән.**






**А. ӘНҮӘРОВ**

# Авария




Мин төш күрҙем. Баҡсала йоҡлап ятам, имеш. Иртән ҡатын йоҡонан уята: “Тор, үҙеңә бер мәрәкә күрһәтәм,” – ти. Ҙур булмаған ергә барғас ҡына ашар өсөн картуф ултыртҡайныҡ. Ҡатын туп-тура шунда алып килде. Һай, донъя хикмәте!

– Шатлан, – ти ҡатын, – һинең ҡорттар ашамай торған сортың!

– Һуң, шулай тип һатҡайнылар бит, – тип аҡланырға теләйем. Ул мине тыңларға ла теләмәй үҫемлектәрҙе берәм-берәм тамырҙары-ниҙәре менән йолҡоп ырғыта.

– Был аждаһаларҙы ҡул менән сүпләп, күҙҙәремде бөтөрмәйәсәкмен, вәт! – тип ебәрә...

Шунда ысынлап уянып киттем һәм бер аҙ аптырап ятҡас, хикмәттең нәмәлә икәненә төшөндөм: төшкә былтыр баҡсала булған хәл ниндәй үҙгәрешһеҙ кергән! Бына һиңә, мә! Тауыҡ төшөнә тары керә тигәндәй, минең иң яратҡан аҙығым – картуф. Уны беҙҙең яҡта йә бәрәңге, йә бүлбе тип тә йөрөтәләр. Бына ошо ризыҡ арҡаһында һуғыш йылдарында беҙ аслыҡтан үлмәй ҡалдыҡ та инде. Малай саҡта яҙ кендәрендә ерҙе соҡоп, туң картуф йыйып йөрөгәндә, үҙ-ара шундай таҡмаҡ та әйтә торғайныҡ:

# ХУЖА БЕҘҘЕҢ АРАЛА

Ҡаланан ауылға хәбәрсе килеп төшә. Бер танышы уның артынан ата-әсәһенә күстәнәс ебәрә. “Ошо адрес буйынса, зинһар, илтеп ҡуй инде!” – тип үтенә. Дуҫтың йомошон нисек үтәмәһен инде – риза була.

Ауылға килгәс, әйтелгән йортто эҙләп таба. Өйҙә урта йәштәрҙәге ир мейес сығара.

– Хужа һеҙме?

– Эйе.

– Бына улығыҙ һеҙгә күстәнәс ебәрҙе. – Ул пакетты өҫтәлгә ҡуя.

Мейессе егеткә һорауҙар яуҙыра:

– Улым эшләйме, ни хәлдә йәшәп ята, үҙе ҡайтып китергә уйы юҡмы?

– Һәләк һәйбәт көн күрә. Улығыҙ шәп егет. Гәҙел, ифрат шелекле, бер һүҙ менән әйткәндә, бар яҡтан да булған егет! – тип маҡтай уны ҡала кешеһе.

Мейессенең кәйефе күтәрелеп китә. “Һәйбәтсе, әләйһә”,– тип тамағын ҡырғылап ала.

– Һеҙ улығыҙ менән ғорурлана алаһығыҙ, ағай, – тип маҡтауын дауам итә журналист. – Баҫалҡы, әҙәпле...

Ағай эшен ҡуйып тора. Килеп тоҡсайҙы тикшерә, унан коньяк килтереп сығара.

– Әйҙә, ҡустым, яҙған аштан ауыҙ итәйек, танышып алайыҡ!

– Әллә-ә, оятыраҡ булмаҫмы икән?

– Нишләп оят булһын, ти, анау хәтле ерҙән күстәнәс йөкмәп йөрөп, йә-йә, тартынма! – тип, өгөтөнә күндерә ҡунаҡты мейес оҫтаһы.

Матур ғына гәпләшеп, коньякты йөпләп ҡуйыуға, йорт хужаһы эштән ҡайтып керә. Мейес оҫтаһы үкенә:

– Эх, Ғафар ағай, әҙерәк һуңланығыҙ бит, ә. Улым ебәргән күстәнәстән күберәк тәмләр инегеҙ – бер рюмка ғына ҡалған шул, – ти, үҙе лә уңайһыҙланып. – Бына, ҡаланан килгән ҡусты менән мас булып ултырабыҙ...

Уның һүҙҙәрен ишеткәс кенә хәбәрсе хата килеп сығыуын шәйләй, сөнки таныш дуҫын “Ғафарович” тип йөрөтөүҙәрен иҫенә төшөрә. Шунан:

– Һеҙҙең исемегеҙ кем һуң? – тип өндәшә мейессегә.

– Минең исемем Хужа була!..

Хәбәрсе шаҡ ҡата, аптырауҙан башын тота. Шунан хәлде кейләргә теләп, магазинға коньяҡҡа саба.

**Исмәғил ҒИМРАНОВ.**
Учалы ҡалаһы.

✦ Етди күҙлектән

# Кемгә ышанырға?

**Беҙҙең ашаған ашыбыҙ**
**Серек картуф-кәлйемә.**
**Астан үләһең килмәһә,**
**Кәлйемәләй мәлйемә.**

Көтмәгәндә бына шул беҙ яратҡан картуфтың ҡан дошманы пәйҙә булды ла 1983 йылдан башлап кешеләргә, илгә, фән алдында әр-яңы проблемалар тыуҙырҙы. Был ҡортҡа ҡаршы көрәшеү өсөн илдә махсус тикшереү институттары асылды, уларға ҡаршы төрлө дарыуҙар уйлап сығара ла башланылар. Эйе, йәшел үҫентеләргә һибеп, ҡуңыҙҙарҙы күпмелер кимәлдә юҡ иттек, ә һеңеп ҡалған ағыуҙы иһә картуф менән бергә рәхәтләнеп ашаныҡ...

Ошо күргән төштән һуң мин ирекһеҙҙән картуф һәм ҡуңыҙҙар проблемаһы менән ныҡлап ҡыҙыҡһына башланым. Телəгə булған ҡолона – сығарып ҡуйыр юлына, тигәндәй, шундай көндәрҙең береһендә гәзиттә “Икенсе икмәкһеҙ ҡалмабыҙ. Ғалимдар картуфтың яңы сорттарын сығара”, тигән баш аҫтында ҙур интервью баҫылып сыҡты. Унда картуф селекцияһы менән шөғөлләнеүсе ойошмаларҙың ҡайһы бер етәкселәре теленән әйтелгән күп төрлө мәғлүмәттәр килтерелә.

Нисек ҡотолорға һуң был фажиғәнән? Кешегә файҙалы бер генә юл бар икән: ул – селекция ысулы менән ҡорттарға бирешмәй торған сорттар табыу. Ә был еңел түгел, сөнки бер селекция өсөн егерме йылға яҡын ваҡыт кәрәк. Шуға һөйөнәйек, беҙҙең республика ғалимдары йоҡлап ятмай. Картуфтың яңы сорттары өҫтөндә тырышып эшләйҙәр. Бының өсөн шарттар за булдырыла. Ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институты бар. Ул картуф селекцияһы менән 1957 йылдан бирле нигеҙҙә Өфө тәжрибә хужалығында шөғөлләнә.

Ниндәй генә маҡтаулы хеҙмәттәре булһа ла, ярты быуаттан ашыу тәжрибәһе булған институт ҡуңыҙҙар ашамай торған картуф сортын әлегә уйлап тапмаған. Ундай маҡсатты алдарына ҡуйырға йыйынмайҙар ҙа шикелле. “Беҙ сығарған “Башкирский” сортына колорадо ҡуңыҙы аҙыраҡ зыян һала, – тип яҙа улар. – Был бөтөнләй картуфтың һабағын ашамай тигән һүҙ түгел, бары әҙерәк зарарлай. Шуны иҫкә алып, беҙ ул аҙыраҡ зыян итеүсе сорт сығарыу өҫтөндә эшләнек. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡуңыҙ бөтөнләй ашамай торған сорт юҡ”.

Фекер, әлбиттә, ҡыҙыҡлы. Ауылға ҡайтҡанда мин картуфты күпләп үҫтереүсе таныштарым менән был хаҡта һөйләштем. Хаҡлылармы, түгелме – белмәйем, тик улар көлдө генә. Бер саҡ ейәнем үҙе уҡыған “Тәбиғәтте өйрәнеү” дәреслеген килтереп тотторҙо. Унда былай тип яҙылған: “Ғалимдар шундай тәжрибә үткәрә. Колорадо ҡуңыҙының 70 ҡарышлауығы булған картуф участогын плёнка менән бүлеп алалар һәм эскә 5 дана икенсе төр ҡуңыҙҙы (жук-жужелиц) ебәрәләр. Бер нисә көндән бөтә колорадо үләттәренән эҙ ҙә ҡалмай...” Тимәк, тәбиғәттең ҡоротҡостарға ҡарата мөмкинлектәре әле бөтөнләй бөтмәгән, уны эшкә ҡуша белергә генә кәрәктер, моғайын.

Силәбенән килгән гәзиттәрҙең береһендә баҫылған яҙмала ла быға ишара бар һымаҡ. Бында ла ошо ҡоротҡостарға ҡаршы егерме биш йыллап көрәшәләр икән. Ә һөҙөмтә? Ашыҡмайыҡ. Уға юлды тәүҙә халыҡ үҙе күрһәтә. “Темп” тигән сортлы картуфҡа колорадо ҡуңыҙы төшмәүен әйтәләр. Ғалимдар шуға нигеҙләнеп, тикшеренеү эшенә тотона һәм тағы ла шундай уҡ “Лосунок” тигәне лә бар икән. Ахырҙа улар шаҡтай күбәйеп тә китә: “Белорусский – 3”, “Орбита”, “Брянский надежный”, “Каменский”... Эйе, ер йөҙөндә дүрт меңдән артыҡ сорт үҫтерелә икән, әммә бына ошо етеһен генә ҡуңыҙ ашамай тип раҫлана...

Көтөлмәгәндә килеп кергән төш мине бына шундай уйҙарға һалды. Кем хаҡлы ла кем хаҡһыҙ? Кемдең һүҙе дөрөҫ, кемдеке уйҙырма? Кемгә ышанырға, кемгә ышанмаҫҡа? Ниңә, һуңғыларҙың һүҙе хаҡ булһа, ут күршеләр быны белмәй, тегеләре ниңә тәжрибә уртаҡлашмай? Бармаҡ осондай ғына бөжәк ниңә беҙҙе мәсхәрәләй, беҙҙән көлә? Ә беҙ? Малай саҡта сығарған таҡмағыбыҙҙағы кеүек, улар алдында, кәлйемәләй мәлйеп ҡалдыҡмы?

**Рәсих ХАННАНОВ.**



Марат КӘРИМОВ

## Мини-дәүләт

Был дәүләттә йәшәй-йәшәй
Күрмәгәндәр күрелде,
Кеше икәнде онотоп,
Винтик булып йөрөлдө.

Инде винтик та түгелбеҙ, –
Шулай, ти, етәкселәр.
Ә үҙҙәре беҙҙе тағы
Әллә кем итмәкселәр.

Был дәүләттә үҙгәреш аҙ,
Һаман да иҫке ғәҙәт.
Шул ғәҙәткә күнәһем юҡ,
Мин үҙем мини-дәүләт!

Миндә эске-тышҡы эштәр
Демократик тәртиптә.
Уның барлыҡ өҫтөнлөгөн
Бөтөп булмай әйтеп тә.

Уй иркенә, һүҙ иркенә
Шул система юл асты.
Минең дәүләт өнәп бөтмәй
Вертикальный власты.

Аҡыл, Намыҫ, Выждан, Иман
Парламентҡа һайланған.
Шулар дәүләтте ҡурсалай
Өҫкә яуған ялғандан.

Үҙен мине-дәүләт иткән
Шәхестәрҙе йыш күрәм,
Улар менән дипломатик
Бәйләнештәргә керәм.

Бер-береңә тигеҙ ҡарау –
Шундай шарт ҡуям әүәл.
Мине тиңе күргәндәргә
Мөнәсәбәтем лояль.

Гражданына шулай ҡарау
Иң беренсе нәүбәттә
Булһа икән беҙ йәшәгән
Рәсәй тигән дәүләттә...

## Һәр кемдең үҙ көнө

Хәйерле көн! Хәйерле көн!
Алкашҡа ул – хәмерле көн,
Бюрократҡа – әмерле көн,
Бизнесменға – әйберле көн,
Ғашиҡтарға – күҙерле көн,
Хәйерсегә – йәберле көн,
Астан үлһәң – ҡәберле көн,
Бына ниндәй хәҙерге көн.

## Шағир яҙмышы

*“Керләнеп бөттөм үҙем,*
*донъяны паклай алманым”.*
Ғабдулла Туҡай.

И малай саҡ! Күпме уйын
Алдатҡан беҙҙе.
– Көндән төн яһайбыҙ! – тиеп
Йомабыҙ күҙҙе.

Ҡараңғыла бер ни күрмәй
Торабыҙ баҫып.
Унан төндән көн яһайбыҙ
Күҙҙәрҙе асып.

Шуға ышанған булабыҙ:
Беҙ ниндәй көслө!
Бер уйлаһаң, шағирҙар ҙа
Малайҙар төҫлө.



Йырым менән күңелдәрҙе
Ағартам, тинем,
Был донъяны сүп-сарҙарҙан
Таҙартам, тинем.

Шул уй менән яна-яна
Бирелеп дәртҡә,
Илһамланып китеп барҙым
Ижади мәртҡә.

Бына күҙ астым. Донъяһы
Ағармаған да.
Ул һаман да шул бер килеш –
Таҙармаған да.

Сүп һаман да өҫтә йөҙә,
Ә төптә – алтын.
Белдеңме инде, и шағир,
Һүҙеңдең хаҡын?

Үҙ көсөңә нык ышанып,
Яңылыштың буғай.
Шул малайҙарҙың уйыны –
Яҙмышың буғай...

## Ҡурҡыталар

*Беҙ кризиста тыуғанбыҙ,*
*Беҙ кризис балаһы.*
*Кризиста тыуғандарҙың*
*Кем икән һуң бабаһы?*
Яңы йыр.

Көнө-төнө әй шаулайҙар:
Кризис та кризис!
Беҙҙе ҡурҡытмаҡсылармы?
Шуны аңлап булмай һис.

Ҡурҡытырһың беҙҙе! Беҙ бит
Кризиста тыуғандар.
Кризиста үҫә-үҫә
Үҫеп кеше булғандар.

Беҙгә барыһы нипочём,
Ут-һыуҙарҙы үткәнбеҙ,
Кризиста йәшәүҙәргә
Күнегеп тә бөткәнбеҙ.

Кризис бөтһә, ни ҡылырбыҙ? –
Ирекһеҙҙән уйлата.
Уға өйрәнеп булырмы?
Шуныһы ҡурҡыу уята.



# Вәғәҙәләрҙән бармы мәғәнә?



Белорет юлдарының ниндәй икәнлеге һәр кемгә мәғлүм: саҡ ҡына аңшайып, ауыҙыңды асып барҙыңмы – бөттө китте, йәһәннәмгә осҡаныңды һиҙмәй ҙә ҡалырһың. Шуғалырмы икән, бында йомшаҡ креслола ултырған ағай-апайҙарҙың да вәғәҙәләре йыш ҡына тәғәйен урынға барып етә алмай әллә ҡайҙа ғәйеп була ла ҡуя.

Журналдың 2007 йылғы 1-се һанында «Һикәлтәле юл», «Өҙөлгән өмөт», «Мәсхәрәләнгән урамдар» тигән тәнҡит мәҡәләләре баҫылғайны. Тәүге яҙмала Белорет – Өфө трассаһынан Түбәнге Төлмәй ыңғайына боролғас, юлдың соҡор-саҡырҙан ғына тороуы тураһында яҙылғайны.

Тиҙҙән район хакимиәте башлығы Н. Максимовтың ошо мәҡәләгә ҡарата «Юлды ремонтлау, шулай уҡ Яңы Хәсән ауылының Тракт урамына ҡырсынташ түшәү 2007 йыл планына индерелгән», тигән яуап хаты баҫылғас, ҡыуанысыбыҙҙың сиге булманы. Беҙгә ҡушылып, шул тирәлә йәшәүсе Көмбә, Сәфәрғол, Манышты, Түбәнге Төлмәй ауылдары халҡы ла шатланды. Әнә эшләйҙәр, бына эшләйҙәр тип көтә торғас, ике йылдан ашыу ваҡыт үткәнен дә һиҙмәй ҡалғанбыҙ. Хәҙер хафалана башланыҡ инде. Тормош бит, бәлки, юлға сығып та, абайламай килеп, берәй яман урынға вәғәҙәләре-нейе менән төшөп киттеләрме икән тибеҙ. Тәүбә-тәүбә!

«Өҙөлгән өмөт» мәҡәләһендә Манышты ауылындағы элемтә бүлексәһенең ябылыуы, һеҙөмтәлә биш ауылға (Манышты, Сәфәрғол, Түбәнге Төлмәй, Александровка, Кәрпескә) бөтә гәзит-журналды, пенсия-пособиеларҙы бер генә почтальон ун саҡрым алыҫлыҡтағы Инйәр ҡасабаһынан ташыуы тураһында яҙылғайны. Шул сәбәпле ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыусыларҙың кәмеүе лә әйтелгәйне.

Был хатҡа ла матур яуап уҡып һөйөндөк. БР унитар элемтә предприятиеһының Белореттағы филиалының ул саҡтағы начальнигы А. Кузнецов: «Маныштыға тиклем почтаны машина менән ташыясаҡбыҙ», – тип вәғәҙә биргәйне. Инйәр яғынан килгән машиналарҙы көтә торғас, күҙебеҙ талып бөттө. Кузнецов әфәнденең беҙгә инселәгән тимер аты әллә тауташ араларында дөмөктө инде...

Ә «Мәсхәрәләнгән урам»да Манышты ауылында газ торбалары һалынған траншеяның тигеҙләнмәүе, уның халыҡ өсөн күп уңайһыҙлыҡтар тыуҙырыуы хаҡында һүҙ барғайны. Бер аҙҙан журналда БР Тәбиғәтте файҙаланыу, урман ресурстары һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау министрлығы ҡарамағындағы Көньяҡ-Көнсығыш район-ара комитеты рәйесе И. Пенькинаның яуабы донья күрҙе. «Фельетондағы факттар автор менән бергә сығып тикшерелде, етешһеҙлектәр бөтөрөлдө», тигән яуап булды. Әммә был күҙ буяу ғына ине. Күрәләтә шундай ялғанлыҡҡа нисек түҙеп тормаҡ кәрәк?

Кемдендер тәҡдиме менән дүрт кеше миңә килде. Бында И. Пенькина үҙе лә бар ине. Бишәүләп трасса янына барҙыҡ, уларға трассаның ниндәй торошта булыуын күрһәттем. Ахырҙа Пенькина ханым үҙе менән килгән иптәшкә:

– Һеҙ был урынды рәтләргә тейешһегеҙ, – тине. – Шунан миңә ҡарап: – Һеҙгә нимә кәрәк? Ни өсөн туҡтамайһығыҙ? Яҙаһығыҙ ҙа яҙаһығыҙ! – тине. Ә мин:

– Тейешле тәртипкә килтергәнсе яҙасаҡмын, – тинем.

Һәм яҙам да шул.

**Нурулла МИҺРАНОВ,**
Белорет районы.

А. ВАСИЛОВ




**– Беҙгә ҡатыраҡ берәй нәмә бирегеҙ – тыуған көнөбеҙҙө билдәләйбеҙ.**
– Нам что-нибудь покрепче – отмечаем день рождения.

# Үәселей тәкәһе



Һуғыштан һуңғы ауыр йылдар. Бер саҡ ауылыбыҙға ҡайҙандыр Үәселей исемле кәзә тәкәһе алып ҡайттылар. Үҙе бик ҙур, хатта ҡарап тороуы ҡурҡыныс. Ул гелән урам буйлап япа-яңғыҙ йөрөп көн итте. Үәселейҙән бөтә мал-тыуар ҡурҡып ҡаса торғайны, кешеләр ҙә ул күреү менән яҡын-тирәләге кәртә башына һыпыртыу яғын ҡарай. Әгәр ҙә аңшайып торһаң, бөттө баш, тәгәрәтеп йөрөп һөҙә башлай.

Нисек ҡыҙыҡ табырға белмәгән малайҙар ҡайһы саҡ шул тәкәне үсектереп, ирештереп бер була бит. Бер көндө Шәреп араһы малайҙары уны ярһыта ла үҙҙәре берәм-берәм ситән башына менеп ултыра.

Инде күҙенә аҡ-ҡара күренмәгән Үәселейҙең юлына һөт айыртып, биҙрәһен, ҡаймағын күтәреп килгән Мәнәүрә апай тап була. Ҡото осҡан апай ҡулынан биҙрәһен ҡаймағы-ниһе менән төшөрөп ебәрә, биҙрәнең тотҡаһы тәкә мөгөҙөнә эләгә. Тәкәнең бөтә ере, күҙҙәре ҡаймаҡҡа буяла.

Колхоз идараһына ата-әсәләрҙән, уҡытыусыларҙан ялыу килә башлағас, бөтә кешенең ҡотон алған Үәселей кинәт юҡҡа сыҡты.

Ул ваҡыттан бирле әллә күпме ваҡыт үтһә лә, ауыл халҡы Үәселейҙе онотмай. Хәҙер ауыл араһында эшһеҙлектән йонсоп, ҡайҙа барып бәрелергә белмәй шаңҡып, үҙен-үҙе ҡарамай йөрөгән кешеләргә «Үәселей тәкәһе булдыңмы әллә?», тиҙәр.

**Рәйсә ФӘЙЗУЛЛИНА.**
Ғафури районы.










**А. ЛЕВИТИН, А. САЙРАНОВ, Р. ЮНЫСОВ һүрәттәре.**

# Жирный Хәким



Хәким ағайҙың ҡыҙы кейәүгә сығырға йыйына. Улар мул ғына өҫтәл әҙерләп, ҡатыны менән буласаҡ ҡоҙаларын көтә башлай. Тиҙҙән ҡунаҡтар килеп тә төшә. Былар тәүҙә уларҙың икеһен дә фотоға төшөрә. Хәкимдең эше, ғаиләһе тураһында һорашалар ҙа, ашап-эсеп, туй хаҡында һөйләшмәй генә ҡайтып та китәләр. Бер аҙҙан колхоз рәйесе Самат аһылдап килеп инә.

– Ҡайҙа теге корреспонденттар, Хәким ағай? Артығын ысҡындырмаһыңмы, колхоз ерен һөрәп бөтөрәп барабыҙ, тип әйттеңме?

Рәйестең һүҙенән бөтәһе лә шаңҡып ҡала. Ир менән ҡатын ни тип әйтергә белмәй торған саҡта ҡапҡа алдына ҡыҙыл төҫтәге «Жигули» килеп туҡтай. Унан буласаҡ ҡоҙа менән кейәү егете килеп төшә, әммә уларҙың ҡыҙ йәрәшергә килеүенә өҫтәлдә ашарлыҡ бер ни ҡалмай...

Туй ваҡытында ҡоҙа үпкәләгәндәй итеп: "Мин ҡыҙ һоратырға килгәндә ҡоҙамдың өҫтәлендә буш шешәләр менән кимерелгән ҡаҙ һөйәге генә ине, ул үҙемә оҡшап бигерәк жирный икән", – тип әйтеп ҡуя.

Ил ауыҙын иләк менән ҡаплап буламы ни, шунан китте инде, "жирный Хәким".

**Нәзирә ИШҠОЛОВА.**
Салауат ҡалаһы.

# Өрәк



**Тирә-йүнде ҡараңғылыҡ пәрҙәһе ҡаплаған. Зариф машинаһында ҡайтып килә. Ауылға етер саҡта, зыярат эргәһендә ҡул күтәреп торған әбейҙе күреп, машинаһын туҡтата. Ишекте асып ебәреүе була, аҡ яулыҡ ябынған, аҡ күлдәк кейгән әбейҙе күреп, һуҡмыш егеттең башынан йәшен тиҙлегендә «өрәк бит был» тигән уй үткән. Ул ҡурҡышынан үрмәләп менеп килгән әбейҙе кире төртөп сығарып, ишекте шап итеп ябып, ҡуҙғалып та киткән. Бара торғас, тәҙрә эргәһенән елберләп барған аҡ нәмәне күреп ҡалған да, өрәк мине ҡыуа сыҡҡан бит тип, тиҙлеген тағы арттырған. Әммә теге лә ҡалышмай, имеш.**

**Ҡото осҡан егет йән фарман йорттары эргәһенә килеп туҡтаған да машинанан сығырға ла ҡурҡып ултыра икән. Күпме шулай ултырғандыр – үҙе лә иҫләмәй, машинаның ишеген шаҡығанға һиҫкәнеп, асып ебәрһә, күрше Хәкимә инәй сәстәрен ялбырлатып, ялан баш баҫып тора, ти.**

**– Улым, яулығымды бир инде, ишеккә ҡыҫтырып алдың да киттеңсе, – ти икән.**

**Бәхетенә, теге "өрәк" – ҡайтмаған быҙауын эҙләп ҡайтып килгән күршеһе Хәкимә инәй булған.**

**Рәмзиә ГАЙСИНА.**
Бөрйән районы.

# Кәримов Ноябрь

*Күмертауҙан ҡунаҡтан ҡайтып киләбеҙ. Мәләүез автовокзалында арыу ғына ҡырын тейәгән Октябрь ағайыбыҙ тегеләй ҙә былай йөрәп ята. Эргәһенә милиционер килеп:*

*– Эскән килеш ни эшләп йөрөйһөң бында, исем-шәрифең кем? – тип һораны. Тегеһе мотто ла:*

*– Ҡунаҡтан ҡайтып барам, Кәримов Ноябрь булам, – тине.*

*Шул саҡ милиционер:*

*– Ундай исем булмай, ниңә алдашаһың?! – тип арҡаһына таяғы менән берҙе тондорҙо.*

*Теге:*

*– Теймә миңә, дөрөҫө Ҡорбанов Октябрь, – тимәһенме!*

*Аптырап ҡалған милиционер:*

*– Нимә, хәҙер арҡаңа тағы берҙе бирһәм, Сентябрь тип әйтерһеңме? Ниңә мыҫҡыл итәһең?! – тип һелтәнгәйне, мин:*

*– Теймәгеҙ, был бит беҙҙең колхоздың иң елле балта оҫтаһы Ҡорбанов Октябрь Миңләхмәт улы, – тинем.*

*Милиционер Октябрь ағайҙың ҡукрәгенә таяғын терәне лә:*

*– Икенсе тапҡыр не мыҫҡыллай власть кешеһен! – тине.*

*Ошо хәлдән һуң Октябрь ағайыбыҙҙың бүтән исем-шәрифкә ҡуҫкәнен ишеткән кеше булманы, күрәһең, милиционер менән осрашып һөйләшеү ғүмерлек һабаҡ булғандыр.*

**Таһир КҮСКИЛДИН.**
Мәләүез районы.



# Рәхәт йәшә!

Бер тинтәк ир миңә:
– Һеҙҙе гел яңғыҙығыҙҙы күрәм. Мин дә яңғыҙ. Ике йыл инде тол ҡалғаныма. Ҡараштырып йөрөйөм, бер ҙә бына һеҙҙең кеүек һылыу ҡатын осрамай. Әллә бер ултырып матур итеп һөйләшәбеҙме? Яңғыҙлыҡ, бигерәк тә беҙҙең йәштә, ауыр хәл. Уртаҡ тел тапһаҡ, берләшеп, шул яңғыҙлыҡтан ҡотолор инек, – ти.

Минең нисек кенә итеп шул "ир" тигән сирҙән ҡотолғанымды белһә, ул бәндә ауыҙын да асмаған булыр ине. Юҡ инде, хәҙер мине ул ир кәртәһенә бер кем дә кире керетә алмаҫ. Ҡурҡҡаным – ир көйөн көйләп, кер йыуып, аш бешереп, өйҙә бикләнеп ултырыу. Дуҫтарым менән тәбиғәт ҡосағында шашлыҡтар бешереп, турбазаларҙа байрамдар яһап йәшәгем килә минең. Былай ҙа ярты ғүмерем шул ир хәтерен һаҡлап, ситлектәге һандуғастай бикләнеп ултырып үтте. Ял йорттарына, санаторийҙарға йөрөү ҡайҙа! Эштән әҙ генә, берәй сәғәткә генә, һуңлап ҡайттыммы, өйҙә оло ғауға сыға:

– Әнә бит һинең менән эшләгән Әминә ҡайтҡанға әллә ни ғүмер, һин ҡайҙа йөрөйһөң һуң?! – тип бәйләнә.

Ул Әминәне, ире менән ике маңҡа малайынан башҡаны белмәгән өй тауығын, кешегә лә һанамайым. Беҙҙең директор Ғәли Искәндәрович килеп керһә, иң элек: "Эштәр нисек, красавица?" – тип минең менән иҫәнләшә, аулағыраҡ саҡ тура килһә, билемә ҡулын һала. Әминәне күрмәй ҙә ул. Шуны миңә үрнәк итеп ҡуя, ғәрләнеп үләрһең! Юҡ инде, хәҙер хөрриәттә йәшәйем. Ике ҡыҙым да башлы-күҙле... Ҡайҙа теләйем, шунда барам, кем менән теләйем, шунын менән дуҫлашам. Ирең гел итәгендән тотоп торғанда ниндәй тормош инде ул. Подругаларым да етәрлек, другтар ҙа табылып тора. Минең подругаларым барыһы ла резведёнкалар. Вдоваларҙы яратмайым мин, улар бит шул әллә ҡасан үлгән ирҙәрен һағынып һөйләп тик ултыралар. Улар барҙа другтар менән рәхәтләнеп ял итеп буламы ни!

Другтар тигәндән, мин уларҙы оҙаҡ тотмайым – тиҙ биҙәм: ҡайһыһы мышнай, ҡайһыһынан әллә ниндәй еҫ килә... Бер әрмән генә ярты йыллап йөрөгән ине. Уныһы инде алдан һөйләшеп килешкән буйынса булды.

– Слюшай, ти, красивая женщина. Я тоже красивый. У тебя мужа нит, у меня ещё жена не приехала. Давай до приезда моей жены сексом будем жить, – ти был. Йәлләнем инде... Матур күлдәк алып бирермен, тигәйне, алданы һаран мәлғүн, алмай ҡасты.

Унын ҡарауы мин оло ғына ағайҙы ултырттым төп башына! Ул үҙен, китаптары булмаһа ла, "шағир" тип кенә таныштырҙы. Шул мине яҡташтарына саунаға саҡырҙы. Үҙе ҙур коттеждa иркен генә йәшәп ята. Бик тәртипле ҡыланып, аминдар тотоп, бисмиллалар әйтеп кенә йөрөй. Оҡшатты бит был мине!

– Йәшерәкһең шул, үҙемә генә алыр ҙа ҡуйыр инем, – ти.

– Миңә лә алтмыш тула, ун дүрт йәш айырма нормально ул, – тигәйнем, ағай кеше дәртләнде лә китте, матур-матур һүҙҙәр һөйләй башланы. Бер аҙ тегендә-бында барғылап йөрөгәс, өйләнешергә һөйләштек, никах уҡытырға булдыҡ. Никахҡа барырға тип бынан өс-дүрт арыу ғына күлдәклек аҡса һорап алдым. Бер аҙналап барып йөрөнөм дә, һылтау табып, үпкәләгән булып, тайҙым теғенән. Ағай кеше төп башына ултырып ҡалды.



Хикәйә

Другтар табылмай торһа ла, бер ҙә аптыраған юҡ: сәйен-мәйен алабыҙ ҙа берәй курорт йә булмаһа турбаза тирәһенә китәбеҙ ҙә барабыҙ.

Бер саҡ шулай Римма менән йыйындыҡ та Нөгөш быуаһы янында кис ҡырын юлға сығып баҫтыҡ. Күп тә торманыҡ, арыу ғына машинала ике красавчик килеп туҡтаны.

– Куда едем? – тип һорайҙар былар.

– Хет куда, тик алға, – тибеҙ, үҙебеҙ сырҡылдашып көләбеҙ.

– Бына һеҙ кәрәк тә инде беҙгә, – тиҙәр.

Былар шунда нимәлер төҙөп ятҡан монтажниктар икән. Һыу буйында ғына ҡунып урындары ла бар. И, ҡатын-ҡыҙға һыуһағандар инде. Шундай итеп ухаживать итәләр, иҫ-аҡылың китерлек.

Тик минеке тәрбиәһеҙ булып сыҡты. Шундай ҙа романтик осрашыуҙан һуң йүнле кеше матур итеп үбешеп һаубуллаша бит инде, шуны ла белмәй, йүнһеҙ!

– Ярай, бабуся, пока, – тип мине этәрә.

– Бабуся тиергә, миңә алтмыш тулырға әле ярты йыл бар! Кәүҙәм дә ҡыҙҙарҙыҡы кеүек зифа буйлы, – тигән инем...

– Шулайҙыр ҙа бит, тик йөҙөң Европа картаһы кеүек шул, ҡараңғыла шәйләмәгәнмен, әбей менән йоҡлап ятҡанмын, – ти килбәтһеҙ...

Бер көн мәсеткә барған инем. Мин үҙем һәр урынға кейенеп-яһанып ҡына йөрөйөм. Бер арыу ғына мәсет ҡарты майландыра бит миңә күҙҙәрен. Яҡыныраҡ килгеләп тотондо был миңә:

– Бигерәк тә һылыуһың инде, бөгөн үк өй түремә алып ҡайтып ултыртыр инем, – тип бышылдай.

– Ҡарсығың барҙыр бит, уны ҡайҙа ҡуйырһың? – тием.

– Минең ҡарсыҡ бөгөн-иртәгә үлергә тора, – ти.

Хитрый! Тапҡан йүләрҙе. Уны килтер, ашат-эсер. Ашатып эсерһәң, бына тигән йәштәре лә хәҙер тып итеп килеп инергә әҙер торалар.

Мин юлға сыҡһам да һис аптырамайым. Юл бит ул, рәтен белгән кешегә, үҙе бер мөғжизә, унда ниндәй генә романтик осрашыуҙар булмай!

– Бер аҙ ял итеп алмайбыҙмы? – тип башлайҙар улар тәкдимдәрен. Хәйер, мин ирем менән торғанда ла автобуста йөрөмәнем.

Ғүмерем буйы минең сибәрлектән көнләштеләр, шуға күрә ғәйбәт һаттылар. Белгегеҙ килһә, минең кеүек сибәрҙәрҙең тормошо барыбер гел романтик осрашыуҙарҙан ғына тора ул. Минең бит исемем дә һирәк осрай торған сәскә исеме – Резеда. Беҙҙең кеүектәрҙе тәбиғәт тормошто биҙәр өсөн яратҡан, шуға ла беҙҙә бер ирҙең генә күңелен табыр өсөн өйгә бикләрлек көс юҡ. Ирем дә бер саҡ тотоп алды ла:

– Араланаһыңмы-юҡмы шул аҙғын подругаларыңдан! – тип дер һелкетә башлаған ине, ысҡынып урамға сыҡтым да шундай һөрән һалдым, күршеләге ике домдың халҡы ҡурҡыштарынан йүгерешеп сыҡты. Шунда уҡ милицияһы ла, скорыйы ла килеп етте...

Бына хәҙер биш йыл инде рәхәттә йәшәйем. Ләкин матурлыҡты күрә белгән кеше әҙ шул беҙҙә. Бер көн шулай матур итеп заманса кейенеп сыҡҡан инем, бер йүнһеҙе иптәшенә: “Ҡара әле, ҡара, бынау әбей ҙә елбәҙәк ҡыҙҙар кеүек кендек күрһәтергә сыҡҡан”, – ти. Мин ниндәй әбей булайым, ти? Теләһәгеҙ бына хәҙер шпагат яһап күрһәтә алам, ун саҡрымға саңғыла сығып китә алам. Беҙ бит Римма менән ҡыштың сатнама һыуығында ла Стәрле йылғаһында сумып сығабыҙ. Римма дуҫым бик аҡыллы кеше, ниндәйҙер сектаға йөрөп Евангелие өйрәнә. Уны Батюшка бик тә оҡшатҡан, ҡабул да иткән әле. Батюшка бик яратҡандарын ғына ҡабул итә икән: “Мин һиңә тейгәнмен икән, тимәк һиңә бог үҙе тейҙе”, – тип әйтә ти. Мин дә шунда барып ҡарарға уйлап торам әле. Батюшка мине күрһә, оҡшатыр микән?

... Бер уйлаһаң, был романтик тормош та туйҙырҙы. Бер көн иремә барып:

– Атаһы, әллә оябыҙҙы яңынан ҡорабыҙмы? – тигән инем, моҡоттоң моҡото инде:

– Ҡалһын шулай, өйрәнелгән инде, әйҙә, рәхәттә йәшә! – тине лә ҡуйҙы. Вәт йүнһеҙ!

**Әмир ҠОТЛОЗАМАНОВ.**
Стәрлетамаҡ ҡалаһы.




**– Ришүәт алырға мин йүләр түгел – урынбаҫарыма бирегеҙ...**
– Я не дурак, чтобы брать взятки – отдайте заместителю...

# *Шәриф БИКҠОЛдоң тыуыуына – 85 йыл*



(1924 – 1995)

*1942 йылда хеҙмәткә алынған Шәриф Бикҡол, Севастополь зенит артиллерияһы училищеһын тамамлағас, Бөйөк Ватан һуғышының хәтәр яу юлдарын үткәндә, 1944 йылда Көнсығыш Прусияға ингәс, ауыр контузия ала. Һуғыш яланында күрһәткән батырлыҡтары өсөн I дәрәжә Ватан һуғышы, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары, “Батырлыҡ өсөн” һәм башҡа миҙалдар менән наградлана.*

*Һуғышҡа тиклем үк тәүге шиғырҙары матбуғатта күренгән шағирҙың ижады яу осоронан һуң күҙгә күренеп активлаша. 1947 йылда баҫылып сыҡҡан “Ынтылыу” исемле йыйынтығы – бының асыҡ миҫалы. Шиғырҙар менән бергә ул поэмалар, шиғри повесть һәм әкиәттәр ҙә яҙа, халыҡ яратып ҡабул иткән йырҙар ижад итә. Шағирҙың драматургияла ла хеҙмәте бар. Уның “Бер ҡабынһа, ғишыҡ уты” опереттаһы, “Һыҙылып таңдар атҡанда” драмаһы театрҙа уңыш менән барҙы. Кескәй күләмле әҫәрҙәре лә сәхнәләрҙә ҡуйылды, айырым йыйынтыҡтар булып сыҡты.*

*Шағир “Һәнәк” журналын бер саҡта ла онотманы. Уның сатирик-юмористик шиғырҙары, мәҫәлдәре һәм башҡа күңелле жанрҙағы әҫәрҙәре әленән-әле баҫылып торҙо.*

## “Бизнесмен әфәнде” мин...

*Элекке кеҫә бурының „әлхәмдулилләһи”е*

**Алтын да замандар килде –**
**“эш” майланғандай бара.**
**Кем инем – кем булдым?**
**Бына**
**шул хаҡта уйлап ҡара!**

**Тыныҫмын:**
**аяҡ аҫтымда**
**полный ҡаты ер тоям:**
**күтәрҙеләр, шөкөр –**
**хәҙер**
**высшай ка-те-го-ри-ям!**

**Ҡалымдар башҡа,**
**төп кәсеп**
**итһә лә һаман дауам:**
**инде**
**кеҫәләрҙән түгел,**
**һауанан... байлыҡ һауам!**

**Аппетит та алышынды –**
**ағын-туғын айырам:**
**унар һумлап сәлдермәйем,**
**мил-ли-он-лап ҡайырам!**

**Йортом – батша һарайылай,**
**ашаған-эскән – о’кей!**
**Кейем тиһәң,**
**проблема юҡ:**
**теләгәнде ал да, кей!**

**“Волга” кеүек шаҡы-шоҡо**
**тамам туйҙырҙы, шайтан...**
**Көймәйем –**
**тиҙҙән**
**Париждан**
**“Мер-се-дес”алып ҡайтам!**

**Мең шөкөр,**
**беҙҙе күтәргән**
**Ельцинға “Әлхәм” тимен...**
**...Хәҙер “кеҫә буры” түгел,**
**“Бизнесмен әфәнде” мин!**






**– Бында беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ерләнгән.**
– Здесь покоятся наши предки.



## Тәнҡитләйҙәр...

I

Ел-ямғыр теймәҫлек аулаҡ мөйөштә
шыш-быш килеп, серләшә бер төркөм;
ялт-йолт ҡарана яҡ-яғына һәр кем,
үҙенән төшкән күләгәнән өркөп...
– Был ниндәй тамаша? – тип торорһоң,
шаҡ ҡатып. –
Ниңә улар йыйылған был ышыҡҡа?
Бында эш шунда: олпат бер яҙыусының
яңы әҫәрен күтәрәләр штыкка.
– Сюжеты, мин әйтәм,
баштан-аяҡ яһалма...
– Формаһын ҡарағыҙ –
тауыҡтар көлөрлөк...
– Финалы хаҡында ысынлап уйлаһаң,
баҫҡан ерендә йөрәгең ярылып үлерлек.
– Теленә аҙ ғына иғтибар итегеҙ:
шул да тел буламы – ташҡа үлсәйем...
– Йыйып әйткәндә,
был әҫәр торғаны
уңмаған кәбеҫтә күсәне...

II

Ошо уҡ әҫәргә
ошо уҡ иптәштәр
ултырышта баһа бирәләр:
– Әҫәр тураһында
иң беренсе һүҙ
идеяға барып терәлә.
Ә бында –
ғәжәп оригиналь идея –
тиңдәшһеҙ аҡылдың емеше;
һиҙелә унда замана һулышы,
бөгөнгөнөң йөрәк тибеше.
– Йөкмәткеһе, формаһы –
игеҙәктәрме ни!
Башҡаса әйткәндә, бер бөтөн...
– Тел яғынан килгәндә,
әйтмәй һис ярамай
хәҡиҡәттең дә иң дөрөҫөн:
теле – шыма,
тасуирлауға бик бай...
Уҡыусылар, һис шикһеҙ, рәхмәт әйтерҙәр.
Тик шуныһы бар –
һирәгерәк ҡуйылғандар
йәйәләр һәм... нөктәле өтөрҙәр...

Олпат яҙыусы
ултыра йәйелә биреп,
йөҙө яктырғандан-яктыра.
“Ысынлап та әҫәрем
бик шәп, ахыры”, – тип
уйлай ул, үҙе лә аптырап.




## Сүс бау менән корос сым

**Мәҫәл**

*Ире тупһанан үтер-үтмәҫтән һөйөнсөләргә ашыкты:*

*– Кәләш, кара әле, кер киптерең өсөн бына ниндәй якшы әйбер алып кайттым. Хәҙер керҙәреңде сүс бауға элеп хитланмаҫһың.*

*Ысынлап та, корос сымдан эшләнгән кулайлама бик йәтеш ине. Хатта өйҙән дә сығып тормайынса, ишекте генә асып, махсус төймәләр ярҙамында уны йә түбән төшөрөргә, йә күтәрергә мөмкин.*

*Бөтәһе лә уңайы сыккан һайын уны мактап бөтә алманы.*

*– Кара әле, нишләп күптән алмағанбыҙ. Бынау сүс бау менән этләнгәнбеҙ икән.*

*Йыш кына барыһының хуплауын ишеткән кер киптергес үҙенең кәпәренә башлағанын һиҙмәй ҙә калды. Шулай булмайса тағы! Ул матур, ялтырап тора, ихатала бөтәһенән юғарыла тора. Тик бына сүс бауҙың әле һаман эленеп тороуына уның асыуы килде. Тирәйүндә йәмһеҙләп тора шунда.*

*Шулай көн артынан көн үтте. Йәмле йәйҙе сыуаҡ көҙ алыштырҙы. Унан һалкын кыш етте. Әммә көҙҙән үк тартынкы сымдарҙы аҙ ғына бутһа ла бушатырға оноттолар. Бер көндә күп итеп кер элделәр. Төнгөлөккә ыжғыр ел күтәрелеп, нык кына һыуытып ебәрҙе.*

*Тауҙа зың-зың ыңғырашкан сымдар калтырана башланы һәм кинәт көслө ел купкан ыңғайға ниндәйҙер тауыш ишетелде. Корос сымдан ике киҫәк сым ғына тороп калғайны. Ә керҙәр тырым-тырағай теләһә кайҙа һибелде.*

*Иртән хужабикә бысранған керҙәрен йыйып алды ла, кабаттан йыуып, сүс бауға элеп сыкты. Ә ире ике киҫәк сымды ыскындырып алды ла һарайҙағы мөйөшкә ырғытты.*

*Сүс бау менән корос сым кеҫек хәлдәр кешеләр араһында ла йыш осрап тора.*

**Таһир ЛАТИПОВ.**
Өфө ҡалаһы.

Мар. СӘЛИМ

# Һаҡаллы мөхәббәт

Хикәйә

Ауылдан сығып киткәнемә биш былтыр булды.

Аҡһаҡ – йөрөгән, һуҡыр күргән сағын һағына, тиҙәр. Дөрөҫ икән. Оҙон аҡса артынан ҡыуып, төҙөлөштән-төҙөлөшкә күсеп йөрөү ялҡытты. Тыуған яҡ торған һайын үҙенә нығыраҡ тартты. Тартмаҫлыҡмы ни! Һай, минең ауылым! Ул урманы, ул ҡырҙары, селтерәп аҡҡан шишмәһенә һыуға барған ҡыҙҙары!..

Ҡыҙ тигәндән, биш йыл элек мине Гәүһәриә һылыуҡай, керпектәрен сылатып, оҙатып ҡалғайны.

– Ҡуй әле, юҡҡа балауыҙ һығып, көмөштәй йәштәреңде әрәм итмә! – тип йыуатҡайным ул сағында. – Көн дә хат яҙып торормон, йәнем. Ә йәренгә иномаркала елдереп ҡайтып та етермен!..

Вәғәҙә биреүҙәре генә анһат ул. Ысынында иһә көн һайын түгел, аҙнаға бер мәртәбә лә хат яҙып булманы Гәүһәриәмә. Йыл үткәс тә, иномаркаға ултырып ҡайта алманым. Ни өсөн тиһәң, машиналыҡ аҡса йыйыу рәхәт эш түгел икән. Бигерәк тә кризис-мризис заманында.

Шулай ҙа мин ебеп ҡалманым. Егет егетлеген итә, ти. Машинаһыҙ барыбер ауылға аяҡ баҫманым.

Көн артынан – көн, йыл артынан йыл үтте. Төшөмлө урын эҙләп йөрөй-йөрөй, Гәүһәриәнең донъяла барлығы ла онотолдо.

Улай тигәс тә, юҡ, мин уны бөтөнләйгә хәтерҙән, йәғни йөрәктән сығарып ташламаным. Дөрөҫөн әйткәндә, быға са буйҙаҡ булып йөрөүемдең дә сәбәбе шунда. Күҙ яуын алырлыҡ иномаркала ғына Гәүһәриәләргә килеп, уның ҡулын һоранға ине иҫәбем.

Машина алғас та, юлға әҙерләнә башланым. Өр-яңы модалы бейек үксәле туфли алып ебәрҙем. Ательела шаҡмаҡлы салбар тектерҙем. Ҡара һаҡалымды, машина төҫөндә булһын тип, һарыға буяттым. Ҡыҫҡаһы, шик-модерн! Гәүһәриә күрһә, һуштан яҙып ауасаҡ.

Бына, ниһәйәт, ул тулҡынландырғыс минуттар ҙа етте. Мин, машинамдың йомшаҡ креслоһында бәүелә-бәүелә, Гәүһәриәләрҙең ҡапҡаһына яҡынлаштым. Ирәйеп, рулде йомшаҡ ҡына тотоп киләм. Ҡапыл машина дерелдәп ҡуйҙы. Нимәгәлер маңлайҙы бәреп алдым. Тәгәрмәстәр тайып канауға төшөп китте. Алға ла, артҡа ла тарттырып ҡарайым. Тик алдырып булмай, тәгәрмәстәр батҡандан-бата ғына бара.

Шул саҡ өйҙәренән бәләкәй малай етәкләп Гәүһәриә килеп сыҡты. Урынымдан нисек һикереп торғанымды ла һиҙмәй ҡалдым.

– Гәүһәриә!

Мине күргәс, малай, Гәүһәриәнең ҡулынан ысҡынып, ҡаса башланы. Гәүһәриә уны тотоп алып, йыуатырға кереште.

– Ҡурҡма, был бабай балаларға теймәй!

– Гәүһәриә! – тинем, тулҡынланыуымды баҫа алмайынса. – Был мин.

– Яҡын килмә!

– Илаһым, танымай инде әллә...

Ул миңә бер ауыҡ ғәжәпләнеп ҡарап торҙо ла:



А. ӘНҮӘРОВ




М. ЛАРИЧЕВ

– Гәфү итегеҙ, бабай кеше, – тине, – мин һеҙҙе белмәйем.

– Мин ниндәй бабай булайым, Гәүһәриә һөйөклөм!..

Уны ҡосаҡлап алайым тип үрелгәйнем, машина ҡыҫҡыртҡан тауышҡа тертләп киттем. Боролоп ҡараһам, КамАЗ кабинаһынан Гулливерҙай ир төшөп килә.

– Ни булды? – тине ул, уҫал ғына ҡарап.

– Бынау мөхәббәтһеҙ һаҡалтай миңә бәйләнә! – тине Гәүһәриә, тегенең ҡосағына һыйыныып.

“Гулливер” ҡулдарын ыуаыуа миңә табан атланы. Теҙ быуындарым ҡалтырап китте.

– М-м-мин бер кемгә лә бәйләнмәйем, – тинем, Гәһәриәнең иренә ялбарыулы ҡарап. – Машинамды тиҙерәк тартып сығарығыҙ, зинһар... Ашығам!




## Сәйер сауҙа серҙәре



# Ғәйеп бензинда түгел

Сәлим Мансуров өр-яңы машина һатып алыу ниәте менән баш ҡаланың Октябрь районында урынлашҡан «Калина-Авто» тигән йәмғиәткә килде. Күпте күреп, шымарып бөткән сауҙа хеҙмәткәрҙәре уны ҡосаҡлап тигәндәй ҡаршы алды. Береһенәнбереһе затлыраҡ автомобилдәр араһында йөрөй торғас, ул «Ниссан Альмера Классик» тигәне янында туҡтаны.

– Шәп машина, бер ниндәй ҡайғы-хәсрәтһеҙ теттерәсәкһең генә, – тине һатыусы егет.

– Ярай, ошонохон алам.

– Иҫән-һау йөрөргә яҙһын!

Ысынлап та, харап шәп булып сыға яңы дуҫы. Кәрәкле урынға осоп тигәндәй бараһың да етәһең. Уны күреп ҡалыу менән барыһы ла ах итә, ух итә. Бығаса танымаған әҙәмдәр әллә ҡайҙан килеп сәләм бирә, ҡулын һуҙа. Ялтлап торған машинала выжлатып берәйһенең йорто алдына барып туҡтауы үҙе ни тора!

Әммә Сәлимдең ҡыуанысы оҙаҡҡа барманы. Иртәрәк шатланған икән. Теүәл ун ай үтеүгә, яңы дуҫы көйһеҙләнә башламаһынмы! Утыҙ өс йыл буйы тимер атты көйләпсөйләп тәжрибә туплаған Сәлимгә уның сәбәбен асыҡлау ике тин бер аҡса – двигатель шыңшый. «Юҡ, былай бармай, һуң булмаҫ элек кире алып барып күрһәтергә кәрәк».

– Машинаның двигателе менән не то. Бәлки, минең йылы гаражға ғына барып ҡарарһығыҙ.

Сәлимдең үтенесен ишетеүгә һин дә мин йылмайып торған һатыусыларҙың төҫө үҙгәрә. Әллә тиҫкәре яғы менән торғандар инде. Бына ғәжәп, әҙәм балаһы шул тиклем тиҙ үҙгәрә алыр икән.

– Шулаймы ни? – тип ғәжәпләнгән була үҙҙәре. – Унан йөҙҙәренә важный ҡиәфәт сығарып: – Һис кенә лә ваҡытыбыҙ юҡ, – тиҙәр.

Гарантия ваҡыты бөткәнсе автомобилде ремонтлау хәстәре үҙҙәренең иңендә булғаны ике ятып бер иҫтәренә инһәсе.

Сәлимгә, иномаркаһын предприятиеның автосервисына алып барырға тура килә. Бында машинаны рәхәтләнеп соҡойҙар, ҡутаралар. Ә был турала хужаның үҙенә хәбәр итергә онотаалар. Теүәл бер айҙан уға юристан яуап хаты килеп төшә. Бактиһәң, машинаны сифатһыҙ бензин харап иткән икән, ә һатыусыларҙың бер ғәйебе лә юҡ, имеш.

Ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау һәм кеше именлеге өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы тикшереүселәре лә етди хәлыҡ икән.

– Бында ғәйеп бензинда түгел, ә предприятие хеҙмәткәрҙәренең намыҫында, – тине улар ҡәтғи рәүештә.

**В. ИСХАҠОВ.**



Милли батырыбыҙ Салауат ЮЛАЕВТЫҢ тыуыуына – 255 йыл

# Көрәшсе, шағир

Халҡыбыҙҙың легендар геройы, шағир-импровизатор Салауат Юлаев 1754 йылда Ырымбур губернаһы Өфө провинцияһы Шайтан-Көҙәй волосы Тәкәй ауылында (хәҙерге Салауат районы) тыуған. Уның атаһы старшина Юлай Аҙналин заманының алдынғы ҡарашлы кешеһе булған – Рәсәй мәнфәғәттәрен яҡлап, бер нисә тапҡыр сит ил походтарында ҡатнашҡан. Легенда-рийүәйәттәр һөйләүенсә, батырҙың әсәһе лә сәсән телле, уҡымышлы кеше булған. Салауатты уҡырға-яҙырға тәү башлап үҙе өйрәткән, ә һуңыраҡ, улын яуға оҙатҡан саҡтарҙа, икәү үҙ-ара йыр әйтешеп хушлашҡандар.

1773 йылдың сентябрендә Емельян Пугачёв етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышы башланғас, Салауат уның халыҡҡа ирек һәм рухи азатлыҡ даулаған хәрәкәт икәнен бик тиҙ аңлап ала. Пугачёвҡа ҡушылып, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ихтилалдың иң күренекле юлбашсыларының береһенә әүерелә, унда Юлай Аҙналин да актив ҡатнаша.

Салауат Юлаев үҙе яулап алған ҡәлғәләрҙә ҡаҙаҡ тәртиптәре урынлаштыра. Йәғни, тәғәйенләп ҡуйылған атаман һәм есаул халыҡ теләгәнсә идара итә. Халыҡ та үҙ сиратында уларҙың әмерен ҡаршылыҡһыҙ үтәргә тейеш була. Ихтилал еңгән хәлдә, пугачёвсылар бөтә Рәсәйҙә ошондай демократик тәртип урынлаштырыуҙы күҙ уңында тотҡан. Салауат Юлаев, төрлө милләттән булған күп һандағы ғәскәрҙәр менән оҫта етәкселек итә. “Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ... Беҙгә бер-беребеҙ менән бәхәсләшеп, бер-беребеҙҙе бөлдөрөшөп торорға мөмкин түгелдер,” – тип яҙа ул Ҡатау заводы эшселәренә. Салауат отрядтарға командирҙарҙы һәр халыҡтың үҙҙәренең араһынан ҡуйыуҙы дөрөҫ һанаған. 1775 йылдың 5 майында Өфө провинция канцелярияһында биргән яуабында ул: “Елдәк ҡаҙағы Семён Шемятовты, ундағы казактарҙың һорауы буйынса уларға атаман итеп... бүтән халыҡтар казактарҙы йәберһетмәһен өсөн билдәләнем,” – тип күрһәтә. Сирмеш (мари) Изибай Енбаевты ла “ул тик сирмештәр өҫтөнән генә командир булһын, бүтән халыҡтар уны йәберһетә алмаһын өсөн” полковник итеп ҡуя. Дәһшәтле һуғыштар барған ваҡытта Салауат ябай халыҡты, ниндәй милләттән булыуына ҡарамаҫтан, буталсыҡтар ваҡытында ҡурсалап алып ҡалыу яғын ҡарай. Уның яуҙашы Собханғол Картиков шулай тип хәтерләй: “Көнгөр ҡалаһына яҡынлашҡас, полковник Салауаттан бөтәбеҙгә лә бойороҡ булды: ҡала яулап алынып, унда ингән хәлдә, бер кемде лә яҙаламаҫҡа!” Ошо уҡ ҡаланы ҡамап торған саҡта уның хакимдарына ебәрелгән өндәмәлә Салауат былай тип яҙа: “Ҡалаларҙы алған саҡта халыҡҡа... бер ниндәй ҙә йәберһетеү, туҙҙырыу, рәнйетеү, һалым алыу һәм ғәйепһеҙгә ҡан ҡойоу эшләмәнек... рустар ҙа, бүтән дин кешеләре лә тигеҙлеккә килтерелде. Үҙегеҙҙе һәм ғәйепһеҙ ҡара халыҡты ғәйеп итмәгеҙ,” – тип яҙа.



1774 йылдың сентябрендә Пугачёв тотолғас, ихтилал һүрелеүгә табан китә. Шуға ҡарамаҫтан, Салауат Юлаев Башҡортостан ерендә батша хөкүмәте яҡлы көстәр менән аяуһыҙ алыша. Ләкин был ваҡытта инде Башҡортостанда регуляр армияның ҙур төркөмдәре туплана, улар Салауат отрядтарын юҡ итеү өсөн бөтә тырышлығын һала. 29 октябрҙә батша армияһы генерал-майоры П.С. Потёмкин башҡорт батырына хат менән мөрәжәғәт итә: “Һиңә һуңғы тапҡыр ошо өгөттө яһарға булдым, тәүбә ит, ғәйебеңде таны һәм буйһоноу менән кил... Һине ышандырам, шунда уҡ ғәфү ителерһең. Әгәр был өгөттө лә яуапһыҙ ҡалдырһаң, ул саҡта инде бер ниндәй ҙә аяу көтмә!” Ләкин Салауат уны барыбер яуапһыҙ ҡалдыра. 1774 йылдың 25 ноябрендә ул ни бары 4 кенә юлдашы менән тороп ҡала, уға ҡаршы тотош бер от-

ряд ебәрелә. Салауат иректәге ғүмеренең иң һуңғы минутына тиклем дошмандарына ҡорал менән ҡаршылыҡ күрһәтә. Ошо ваҡытта Юлай Аҙналин да ҡулға алына.

Аталы-уллы пугачёвсыларҙың “ғәйебен” асыҡлау маҡсатындағы тикшеренеү йыл буйына тиерлек һуҙыла. Уларға хөкөм 1775 йылдың 15 июлендә сығарыла. Был хөкөм ҡарары буйынса, Салауат менән Юлайҙың танауҙарын ҡырҡып алалар, маңлайҙарына һәм яңаҡтарына ҡыҙҙырылған тимер менән “З”, “Б”, “И” тигән тамғалар (“злодей”, “бунтовщик”, “изменник” һүҙҙәренең баш хәрефтәрен) баҫалар, икеһен дә 175-әр тапҡыр ҡамсы менән һуҡтырып, Рогервик крепоҫына (хәҙер – Эстонияның Палдиски ҡалаһы) мәңгелек каторгаға оҙаталар.

Салауат Юлаев каторгала 1800 йылдың 26 сентябрендә үлә. 1989 йылдың 16 июнендә Палдиски ҡалаһында башҡорт халҡының легендар геройына һәйкәл ҡуйылды. Унда шулай уҡ Салауат Юлаев исемен йөрөткән урам бар.

Герой-шағир үҙенең поэтик әҫәрҙәрен яттан сығарып та һөйләгән, ҡағыҙға яҙып та ижад иткән. Шуға күрә уның шиғырҙары халыҡ араһында телдән дә, яҙма рәүештә лә таралған. 1917 йылға тиклем Салауаттың әҫәрҙәре 4 тапҡыр – 1880, 1893, 1894, 1914 йылдарҙа урыҫ телендә баҫылып сыға. Хәҙерге ваҡытта уның шиғырҙары илебеҙ халыҡтары телдәренә тәржемә ителде, сит илдәрҙә лә донъя күрҙе.

Архивтарҙа Салауат Юлаевтың ҡултамғаһы ҡуйылған документтар ҙа һаҡлана. Улар күп түгел – ике тиҫтәгә лә тулмай. Ләкин был ҡағыҙҙар – Салауат яҙған хаттар, бойороҡтар, өгөтнамәләр, указдар, күрһәтмәләр – йөкмәткеһе менән уның шиғриәтенә бик ауаздаш көрәшсе һәм шағирҙың уй-ҡараштарын тулыраҡ күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итә.

**Мирас ИҘЕЛБАЕВ.**

**Р. ШӘЙХЛИСЛАМОВ**



**– Күпер ремонтлауға тигән аҡсаға вертолёт яллап, бында ебәрегеҙ!**

– На деньги для ремонта моста арендуйте вертолёт и пришлите сюда!

## ✦ Дауахана мәҙәктәре

# Яңылыш



*Вәсиләгә иртәгә ашҡаҙанын тикшерер өсөн ФГС үтергә, кистән уҡ ашамаҫҡа ҡуштылар. Әммә, үс иткәндәй, туғандары береһе артынан береһе килеп кенә торҙо. Кемелер – аш, икенсеһе – билмән, өсөнсөһө – былау бешереп алғандар ҙа һыуынмаҫ борон ашарға өгөтләйҙәр. Вәсиләнең ашағыһы килә лә бит, ярамай, түҙергә кәрәк. Һыуынғас тәме бөтә, бында йылытып булмай, шуға ла ул аҙыҡтарҙы палаталағы ауырыуҙарға таратып бирҙе. Бигерәк тә эргәһендәге Фәлимә апай маҡтай-маҡтай ятып ашаны. Ул, Вәсиләне ирештергән кеүек:*

*– Бынау мантыйҙары бигерәк тәмле булды, килендәшең ҡайһылай оҫта бешергән, – тип, ауыҙ һыуҙарын коротто. Уның янына ла туғандары күп йыйылды, ҡоҙағыйы ҡыҫтыбайына тиклем бешереп килтергән.*

*– Ҡоҙағый, ҡатыҡлап ҡына ашап ебәр, – тип ҡыҫтаны. Фәлимә апай уны ла йомдороп ҡуйҙы. Вәсилә генә тик ултырҙы.*

*– Эх, ҡасан иртәгә етер икән, мин дә тәмле итеп ашар инем, – тип хыялланды.*

*Инде кис етеүгә шәфҡәт туташы палатаға инде лә:*

*– Вәсилә апай, иртәгә ФГС-ка һеҙгә түгел, Фәлимә апайға икән. Мин яңылыш ҡарағанмын, ғәфү итегеҙ, – тине лә унан Фәлимә апайға бер нәмә лә ашамаҫҡа ҡушты.*

*Ул сығып киткәс, палаталағы ауырыуҙар ҡымаҡлашып көлөп ебәрҙе. Сөнки улар ашағанда Вәсиләнең сак-сак түҙеп ултырғанын күргәндәр ине, килтергән тәмле аҙыҡтар ҙа бөттө, ә иң күп ашағаны Фәлимә апай булды бит.*

**Рәйлә НӘҘЕРҒОЛОВА.**
Стәрлетамаҡ ҡалаһы.










# Яңы ғаилә

Аңламаһа бер-береһен
Ир менән ҡатын,
Был сағында йәшәүҙәре
Үтә лә ҡыйын.

Аңлашһалар тик ҡараштан –
Бер һүҙһеҙ, өнһеҙ,
Ул ваҡытта тормоштары
Бик тә күңелһеҙ.

Нисек төшөнәһең инде
Ҡатындарҙың, ирҙәрҙең,
Һәр ғаиләлә тик үҙенсә
Тыуып торған серҙәрен.

Әнә шуға аңлашмай ҙа,
Һөйләшмәй ҙә тормайыҡ:
Көн талашһаҡ, төн ҡауышып,
Яңы ғаилә ҡорайыҡ!

# Кем ахмаҡ?

Ҡатын:
– Алйотлоҡҡа, ахмаҡлыҡҡа
Әгәр ярыш үткәрһәләр,
Кәмендә икенсе урын
Алыр инең иллә-мәгәр!

Ир:
– Ниңә түгел беренсене?
Кәмһетәһең, атаҡ-атаҡ!..
Ҡатын:
– Ярыш ойошторған хужа
Бирер!.. Үҙе була тороп ахмаҡ!

# География

Географиянан уҡытҡан
Уҡытыусы Сәбилә
Әйтте малай әсәһенә:
– Улың фәнде хөрт белә!

Әсә һорай: – Ниндәй фәнде?
– Шәп фән – географияны!
Ҡайҙа ер-һыу, ил, йылғалар –
Өйрәтә бар донъяны!

– Бысағыма кәрәкме ул,
Баш ҡатырып белергә.
Беҙҙең алған тин аҡсаға
Уға ҡайҙа йөрөргә?!



Риф МИФТАХОВ

## Өйләнгәс шәп бисәгә

– Дамир дуҫҡай, һин һаман да
Яңғыҙһыңмы?.. Ҡырҡтаһыңмы?..
Элеккесә, бәлеш һалып,
Туҡмасын да ҡырҡаһыңмы?

– Өйләндем бит! Бигерәк уңған
Булып сыҡты минең бисә!..
Ә ҡалғаны – аш-һыу эше
Минең өҫтә – әүәлгесә...

## Егәрле ҡатын

Иртүк Нәғим эшкә саба,
Хеҙмәт уның шундай инде.
Ҡатын туҡый: – Дәртле эшлә,
Тик сығарма бер тиреңде!
– Бәй, – ти ире, – ныҡ эшләгәс,
Тәндән тирҙәр сығыр инде.
– Әйттем-бөттө: тир сыҡмаһын,
Мин бит йыуам күлдәгеңде!



## Күршеләр хәсрәте

– Бөтә аҡсамды алды ла
Ҡатын һыпыртты әле...
– Был – ерунда! – тип
күрһәндә
Күршеһе Миңнеғәле.
Һөмһеҙлектә һинең ҡатын,
Юҡ, минекенә етмәй.
Тунға йөҙ мең аҡса биреп
Ҡыуамын... Нахал!.. Китмәй!..

## Аҡса көтә

(Бер егет зары)

“Иртәнән, төшөн, кистәрен
Тамағыма аш бармай.
Төндәрҙе лә үткәрәмен
Күҙ йоммай, аҙыҡ ҡапмай:

Уны уйлап интегәмен
Аслыҡтан – йоҡо алмай...
Бығаса түҙеп йәшәнем
Бер кемгә хәбәр һалмай,

Инде лә былай бармай:
Аслыҡтан үлһен, ти, микән,
Ниңә ҡатын аҡса
һалмай?!.”

***

Ғилләләрҙең дә ғилләһе –
Ҡатын-ҡыҙҙар хәйләһе.

***

Ирең булһа үтә уяу,
Файҙаһыҙ ул ирен буяу.

## Яҙаланған ир

(Булған хәл)

Ауылда мал тотмай йәшәүҙең ҡыҙығы юҡ. Малы булғас, ашатырына ла кәрәк. Унығын инде кем нисек булдыра, шулай хәстәрләй. Кемдәргәлер йөгө менән тейәп килтерәләр, кемдәр йәй оҙонона үҙенең “уф, Аллам!” (беҙҙең яҡтарҙа ҡул арбаһын шулай атайҙар) арбаһы менән ташый. Әлеге шул, алыр урыны булһа...

Мәрфуға апай көҙөн машинанан һирәк-һаяҡ төшөп ҡалған сөгөлдөр йыйыуҙы һөнәр итте бер йылды. Көнө тура килгәндә шул ҡойолған сөгөлдөрҙө, юл буйында “вахта тороп”, бишәр-алтышар арба һөйрәп ҡайтара: артыҡ эш һөйөп бармаған Сәлиме, баҙға һалып, урынлаштырып ҡына өлгөрһөн!

Бер көндө шулай Сәлим ағай ҡулына гәзит тотоп, ғәҙәтенсә, диванды иҙә икән. Шул саҡ ишектән Мәрфуғаһының сәрелдәк тауышы ишетелә:

– Сәлим! Сәлим, тим!!! Бынау сөгөлдөрҙәрҙе урынлаштыр әле, ә мин әҙерәк ҡапҡылап алам да тағы йүгерәм юл буйына – унда бөгөн ғүмерҙә булмағанса күп ҡойолған сөгөлдөр!

Сәлим ағайға, “аҙбарың яңа!”, тиһәләр ҙә, ҡабалана торғандарҙан түгел. Был юлы саҡ ҡуҙғалып, гәзитен ситкә алып ҡуйған да:

– Чистый яҙаланың шул сөгөлдөрөң менән! – тип һуҡрана-һуҡрана ҡатыны уфаллаға төшөп һөйрәп алып ҡайтҡан байлыҡты баҙға һалырға сығып киткән.

Рәүф ХӘКИМОВ.

Р. ЮНЫСОВ




М. ҒАФАРОВ



Закир ӘКБӘРОВ

# Алиби

Хикәйә

Сибәғәтуллин – олпат ир. Уның донъяһы, бар олпат ирҙәрҙекеләй, түңәрәк: вазифаһы төшөмлө, йорто бай, иномаркаһы ҡыҙыл, бисәһе аҡыллы, һөйәркәһе йәш... Эйе, бисә ниндәй генә сибәр һәм аҡыллы булмаһын, бөгөнгө көндә кем уға ғына риза булып йәшәй. Донъя тотҡаһынан башҡа күңел йыуатҡысы ла кәрәк бит. Тик "күңел йыуатҡысы"ның донъяла барлығы тураһында "донъя тотҡаһы" белеп кенә ҡалмаһын. Белеп ҡалһа – бәлә!.. Бына шул бәләгә тарый яҙҙы ла инде Сибәғәтуллин.

Көндөҙ һөйөклө Сөйөмбикәһен ресторанға алып ингәйне. Ул-был була ҡалмаһын тип, ҙур ҡаланың икенсе ситендәге ресторанға барҙылар. Ул-был була ҡалмаһын тип, ҡәҙерле Кәҙриәһен дә кисәтеп ҡуйҙы. Имеш, эше муйынынан, сит ил делегацияһы, төшкөлөккә ҡайта алмай, төнөн дә бик һуңлап ҡайтыр, ахыры.

Юҡ, бер секунд эсендә барлыҡ һаҡлыҡ саралары селпәрәмә килде лә ҡуйҙы. Ресторандан сығып ҡына Сөйөмбикәһенә машина ишеген асҡан ине, нишләптер күҙе ҡаршылағы кибет алдында уға шарҙай булып ҡарап торған йыуан бисәгә төштө. Аһ ҡәһәр төшкөрө! Күршеләре Тайба ҡортҡа бит! Ғәйбәтсе Тайба! Нимә кәрәк булған уға ҡаланың был ситендә? Ғәйбәт йыялыр... Сибәғәтуллин, һөйәркәһе артынан машина ишеген ябырға ла онотоп, бер нисә секундҡа ҡатып ҡалды. Ә теге убырлы ҡарсыҡҡа әлеге хәл ниндәй ләззәтле секундтар буласаҡ! Күрҙе тек күрҙе, белде тек белде инде! Ҡарсыҡ, ҡулынан төшөрөп ебәргән пакетын алырға ла онотоп, троллейбус туҡталышына йүгерҙе.

Сибәғәтуллин дә, ниһайәт, аңына килеп, бейек машинаһының бейек кабинаһына менеп ултырҙы. Уның аҡыл-аңынан талғын музыка, йомшаҡ түшәк, һөйәркә наҙы ҡайғыһы киткән ине инде. Бына һиңә "эш муйынындан, сит ил делегацияһы..." Бар, ҡатын-ҡыҙға аңлатып ҡара. Ни эшләргә? Нисек бисәһе алдында һыуҙан ҡоро сығырға? Енәйәтсегә ни кәрәк? Алиби! Ул енәйәт урынында булмаған. Булһа ла, икенсе кеше менән булған. Йәғни лә мәсәлән, судьяның үҙе менән. Туҡта! Идея бит был!

– Ҡәҙерлем! – тине Сибәғәтуллин, кеҫә телефонын үбеп алғандай итеп. – Кисәткәс, төшкө аш әҙерләп тормағанһыңдыр инде. Зарар юҡ. Һиңә лә ял кәрәк бит. Теге делегация төштән һуң ғына килә. Күптән бергәләп рәхәтләнеп ресторанда ашаған юҡ. Ун минуттан әҙер бул! "Шарман" тигәнен дә маҡтайҙар...

Ҡәҙриәһенең шатлығын телефон түкмәй-сәсмәй иғтибарлы ир ҡолағына килтереп еткерҙе:

– Ниндәй күлдәгемде кейәйем һуң, атаһы?

– Һуң, үткән аҙнала алған зәңгәрен кей.

Уҡыусыбыҙ Сөйөмбикәнең бөгөн зәңгәр күлдәктә булыуын әйтмәһәк тә аңлағандыр инде.

Ресторанда Сибәғәтуллин, ул-был була ҡалмаһын тип, бая ултырған мөйөшөнән алыҫыраҡ урын һайланы, туҡ булһа ла, тырышып-тырышып, маҡтай-маҡтай ашаны. Кәҙриәһен дә ҡыҫтарға онотманы, теле менән йыуҙы, күңелен күрҙе. Хатта сыҡҡанда һөйөклө Сөйөмбикәһенә алған букеттың яртыһын ҡәҙерле Кәҙриәһенә лә алып бирҙе. Машина ишеген асты, ҡәҙерләп ултыртты. Теге убырлы һаман ҡарап тормаймы икән тип, ҡаршылағы




**– Ресторан ризығын яратмайым, шуға өйҙән бешереп алып киләм.**
– Не люблю ресторанную пищу, поэтому обед из дома приношу.

кибет яғына ла күҙ ташлап алды. Тормаһа һуң! Кәрәк сараһы күрелгән, эше бөткән.

Кисен Ҡәҙриә янына, көндәлек тип әйтерлек ғәҙәтенсә, Тайба әбей керҙе. Ҡиәфәте ғәҙәттәгенән тантаналыраҡ, йөҙө ғәҙәттәгенән серлерәк ине. Сибәғәтуллиндың бисә-сәсә тыңлап, бисәсәсә һүҙенә ҡыҫылып ултыра торған ғәҙәте юҡ. Бөгөн бигерәк тә... Икәүһен сәй өҫтәле артында ҡалдырып, ул бүлмәһенә күтәрелде, ҡапыл ғына ни эшләргә белмәй, ҡулына яңы китап алған булды ла әкрен генә тыңлай башланы.

– Аҙғын! – тине Тайба ҡортҡа ҡәтғи тауыш менән. – Немедленно ауыҙлыҡламаһаң, эшең хөрт. Үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Ресторандан алып сығып, һылап-һыйпап, машинаһына ултыртты.

Ҡәҙриә яңғыратып көлөп ебәрҙе:

– Кит әле! Рестораданмы? Һылап-һыйпапмы?

Тайба телһеҙ ҡалды, оҙаҡ ҡына өндәшмәй торҙо.

– Ниңә хихылдайһың, ә? Ирең йәш бисәгә сығып китер тип ҡурҡмайһыңмы ни? Заһриев кеүек...

– Тимәк, бөгөн көндөҙ, "Шарман" ресторанды?

"Шарман"мы, "Шалман"мы – һин ҡайҙан беләһең уны? Әллә үҙең дә күҙәтеп торҙоңмо?

– Күҙәтеп торманым, Тайба апай. Сөнки мин үҙем инем...

Ҡарсыҡ телһеҙ ҡалды. Ҡәҙриәгә һөҙөп ҡарап торҙо ла:

– Һин инең? Булмаҫ! – тине. – Ирҙәр үҙ бисәләрен улай һылап-һыйпамай ул. Туҡта! Ә ниндәй күлдәк кейгәйнең?

– Зәңгәрен инде. Үткән аҙнала алғанын...

– Ҡулымда роза букеты бар ине, тип тә алдарһың әле.

– Эйе бар ине.

Тайба ҡарсыҡтың һүҙе бөттө, йөҙө ҡара көйҙө. Быныһын инде Сибәғәтуллин күҙ алдына килтерҙе. Ҡортҡа һыуынған сәйен дә эсеп тормай, хушлашмай ҙа сығыу яғына атланы.

Һаҡта торғандай үрә ҡатҡан Сибәғәтуллин иркен итеп тын алды ла йомшаҡ креслоһына килеп ултырҙы, "шап" итеп маңлайына һуғып алды. Иллә баш та һуң үҙеңдә! Юҡҡа ғына "Башлы Борһан", тип йөрөтмәйҙәр бит әле уны.

*Арҙаҡлы ғалим, Салауат Юлаев һәм Халыҡтар дуҫлығы ордендары кавалеры Әнүәр ӘСФӘНДИӘРОВҡа – 75 йәш*



# Ҡотлау-грамма

**Тарих төптәренә төшөү**
**Бер ни тормай был иргә –**
**Үткәндәрҙе бөгөнгөләй**
**Ап-асыҡ һөйләп бирә.**

**Башҡорттоң башҡорт икәнен**
**Белмәгәндәр белһендәр,**
**Шәжәрә байрамдарына**
**Йыйылышып килһендәр.**

**Әнүәр ағайыбыҙға**
**Оҙон ғүмер теләйек,**
**Тыуған көнөн байрам итеп**
**Уйнайыҡ та көләйек!**






**– Ә бит ябай һыра күбегенән генә башлағайны...**
– А ведь начинал с обычной пивной пены...

## Көнкүрһәтмәҫ көнкүреш

# Байҙар ҙа илай...

Өфөнән йыраҡ булмаған Зубов ауылынан ер алып, ҡарт көндәрендә теттереп йәшәргә булды Ишғәле. Ишбикәһе лә ғүмере ҡыланмағаны, яҙ етә башлаһа, баҡса алайыҡ та, баҡса алайыҡ, бер һиңә генә ҡарап ултырыуҙан ялҡтым, тип теңкәне ҡорота. Әйҙә, баҡсаһы ла, көҙгө байлыҡта баш ҡалаға йөрөп һатыу итер аҡсаһы ла булыр, тигән изге ниәттәр тағы ла дәртләндереп ебәрҙе Ишғәле ҡартты. Бына шунан китерҙәр былар байы-ы-ып... Әйткәндәй, Зубовта байҙар ғына йәшәй, тиҙәр бит...

Ҡушғәле ҡоҙаһының берәй эш башлар алдынан: «Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ», – тип әйтергә яратҡанын иҫенә төшөрөп, башта ул ауылға «разведкаға» барып ҡайтырға булды. Халыҡтың йәшәү-көнкүрешен, хәл-әхүәлен белешеп, тын алыштарын тойомлау зыян итмәҫ. Ни тиһәң дә, йәшәү ерен алыштырыу магазиндан күлдәк һатып алыу түгел шул.

– Үәт, хәрриәт! Бына ҡайҙа ул ысын тормош. Һауаһы саф, ерҙәре иркен,– тип ҡыуана-ҡыуана үҙәк урамды буйланы ҡарт. – Амбулатория пункты, почтаһы, балалар баҡсаһы, мәктәбе – бөтәһе лә бер урында, үҙәктә икән. Һай, байҙар өсөн шәйме ни, үҙәктән ситтәрәк булһаң да, кәрәк ергә имгәкләп тә килеп етәһең инде! – тип уйҙарын ҡысҡырып әйткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды Ишғәле.

Шул саҡ үтеп барған берәү, ҡартҡа мыҫҡыллы ҡараш ташлап:

– Дөрөҫ әйтәһең, ҡорҙаш, имгәкләп килеп етергә тура килә. Күрмәйһеңме ни, ямғырҙан һуң кешеләр, тәүтормош мәлендәге кеүек, бысраҡ һөйрәтеп йөрөй һаман, – тип үҙенең аяҡтарын күрһәтте.

– Асфальт юлды бысратып тормаһаң тағы, кит! Ҡайҙан килеп сыҡтың һин?

– Мин ошо ауыл кешеһе, тик үҙәктә йәшәмәйем.

– Аңламаным...

– Әйҙә һуң минең менән, – тип теге таныш булмаған кеше Ишғәлене һөйрәкләп тигәндәй, ауылдың икенсе осона алып китте.

Рәсәй, Ялан урамдарына килеп еткәс, иҫ китерлек күренеш асыла: ике, өс ҡатлы мөһабәт йорттар теҙелеп киткән. Шуларға һоҡланып, Ишғәле һаман эштең ниҙәлеген аңламай, барғанында аяҡтарының еүешләүен һиҙемләне. Бәй, батҡаҡ кисеп киләләр икән былар...

– Юл юҡ. Яҙлы-көҙлө ошо тәтәй кеүек йорттарыбыҙҙа бикләнеп кенә ултырырға тура килә.

– Бындай йорттарҙа ғүмер буйы ла бикләнеп ултырырға риза. Тапҡанһың ҡайғы, – тип ҡарт һаман бысраҡ кисеп, күккә ҡарап килеүен белде.

– Сирләп, «тиҙ ярҙам» саҡырһаң, улары килеп етә алмай. Үҙ машинаң менән елдереп сығып китәйем тиһәң, батып ултыраһың. Балаларҙы баҡсаға илтер өсөн ошолай муйынға етеп торған резина итектәр кейәһең дә, бөтә донъяны елкәгә тейәрҙәй булып, ҡойо кисеп йөрөргә тура килә. Ҡатындарыбыҙ ҙа эшкә шулай дағалы шаҡ-шоҡ итектәрен резина кәлүш, итектәргә алыштырҙы. Әҙәм ышанмаҫ, шулай ҙа көләүселәр табыла.

– Бында байҙар йәшәй, тиҙәр ҙә һуң... Үҙ машинаң жәлке булһа, такси саҡырт.

– Бер нәмә лә жәлке түгел, был юлһыҙлыҡта такси түгел, бульдозер ҙа батып ҡала. Асфальт түгел, исмаһам, ябай ҡырсынташ та түшәлмәгән бит, күрмәйһеңме ни?!

– Күрәм, күрәм. Ишбикәмде бындай батҡаҡҡа йәшәргә алып килһәм, бер көндә башымды ашап бөтөрәсәк. Юҡ, лутсы ҡалалағы фатирымда ғына йәшәп торайым. Мине, ней, ҡорҙаш, үҙәккә кире сығарып ҡуй әле, нык ҡайтҡым килә, тамаҡ та асты...

Теге кеше бер нәмә лә өндәшмәй, үҙе генә белгән юл менән алға атланы. Ә кәйефе ҡырылған Ишғәле ҡарт, һоҡланғыс тәтәй йорттарға ҡарап, юлы-ние булмаған урам уртаһында батҡаҡта тороп ҡалды.

**Р. МОРТАЗИНА.**
Өфө районы.




**– Мине бөҙрәләтегеҙ.**

**– Ә минең сәсте турайтығыҙ!**

**В. АРТУРОВ**






С. КАШАПОВА

**“Һеҙҙә нисек, беҙҙә шулай...”**

**Һәнәк бәйгеһе**

# ХЫЯЛДАҒЫ ЮЛ

*Һәнәк туған, һин хыялый кешеләргә нисек карайһың? Шикләнеберәктер. Әммә беҙгә улай караш ташларға ашыкмайырак тор әле, сөнки беҙҙең шундай булыуыбыҙға замана үҙе ғәйепле. Нисек тиһеңме? Әйҙә, беҙҙең менән хыялланып кара улайһа: бынан егерме-утыҙ йылдар самаһы элек беҙ коммунизмда йәшәгәнбеҙ. Бер кемдән дә бер нәмә лә таптырманык, Хоҙайҙың биргәненә шөкөр кылып йәшәнек. Йөрөр юлдарыбыҙ такыр булмаһа ла, хужаларҙың киләсәктә ошо юлдарыбыҙҙың такырға әйләнәсәге хакындағы вәғәҙәләренә ышандык. Шул юлдарҙан үҙ машиналарыбыҙҙа елдереп йөрөйәсәкбеҙ, тип хыялландык.*

*Вакыт үтә торҙо, заманалар үҙгәрҙе, хужалар ҙа, шөкөр, алышынып кына тора. Күптән беҙ ҙә машиналы булдык. Ләкин юлдар ғына шул килеш – сокор-сакыр, бер ҙә беҙҙең хыялдарҙағы асфальт юк. Ә вәғәҙә бар, шул күңелде йыуата. Хәҙер ейәндәр такыр юлдан елдерербеҙ, тип хыяллана. Беҙ, дөрөҫөн әйткәндә, хатта шул асфальттың ниндәй, нисегерәк булыуын да белмәйбеҙ. Әммә ләкин хыялланабыҙ.*

*Заман алға бара бит, беҙгә иң якшыһы һалынып, тип, тамам хыялыйға әйләнеп бөттөк инде.*

Баймак районының Йәнйегет ауылы халкы исеменән
**Р. ХӘСӘНОВА.**

# Һурҙырыу

**Мин элек торбалар буйлап һыу ғына аға, тип уйлай торғайным. Хәҙер был карашым 180 градуска үҙгәрҙе.**

**Беҙ Сазонов урамындағы 12-се йортта өс йыл самаһы йәшәйбеҙ. Бер көндө һыу үткәргестәрҙе алмаштырабыҙ тип, кеҫәләребеҙҙән бишәр мең һум акса һурып алып киттеләр. Унан һуң апарук вакыт үтһә лә, торба һуҙыусылар күренмәне. Былтыр йәй йәнә бер егет ишек шакыны:**

**– Торбаларҙы яңыртабыҙ, өйҙә тороғоҙ!**

**Ике көндән оҫталар килде. Был юлы:**

**– Фатирығыҙ бейек, оҙон шланг табылғас, мотлак эшләрбеҙ, – тинеләр ҙә шуның менән вәссәләм!**

**Аптырағас, 10-сы торлак эксплуатациялау участкаһы начальнигы Шербинина ханымдың үҙенә киттем. Ишеге асык, бүлмәһендә ике ир менән нимәлер тураһында кыҙып-кыҙып һөйләшә ине. Йомошомдо әйтеп өлгөрмәнем, ул миңә яман итеп караны ла:**

**– Камасаулап йөрөмә, – тип ишеген шап иттереп ябып куйҙы.**

**Күрәһең, уйында акса һурҙырыу ғына булғас, әҙәмсә һөйләшергә лә онота башлаған, бахыр.**

**Йөрөй торғас, был һыу торбалары аксаны ғына түгел, нервыны ла һурҙы.**

**Ишғәле НУРҒӘЛИЕВ.**
Стәрлетамак калаһы.



М. ХӨРМӘТОВ



## Әсһәң шарап – эшең харап!

# Тормош өсөн көрәш

Боронғо Рим полководецы Юлий Цезарь дошмандарын тиҙ һәм еңел генә еңгәс, был хаҡта Римға: «Килдем, күрҙем, еңдем»,– тигән өс һүҙҙән торған хәбәр еткергән.

Өфө районының Волков ауылында йәшәүсе Рима Сибәғәтуллина ла ошо тарихи шәхескә бик тә оҡшарға теләпме, күптән түгел ғәжәп батырлыҡ эшләп ташланы әле.

Рима ханым «Дмитриевка» совхозында һауынсы булып эшләй. Матур бер кистә ул ҡыҙының тыуған көнөн гөрләтергә ниәтләй. Тиҙ арала табын әҙерләнә, өҫтәлгә “аҡбаш”тар килеп ҡунаҡлай. Бер туҡтауһыҙ зың-зың килгән рюмкалар тауышы байрамды тағы ла сағыуыраҡ итә. Тостар, теләктәр яңғырай:

– Бәхетле тормош өсөн!

– Бәпесем, алтыным, киләсәктәге тормошоң ошо араҡы ише ап-аҡ, саф ҡына булһын!

Әллә нишләп шул “аҡбаш”тар тиҙ бөҫкәрә шул. Алғанда байтаҡ кеүек күренһә лә, өҫтәл артына ултырып, ирен сылатырға өлгөрмәйһең – капут! Был юлы ла шулай булды. Күңелле генә байрам итеп ултырған ҡунаҡтар һуңғы яртыны төпләгәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

– И-и-и, был ни башҡа, ни артҡа тигәндәй.

– Бер йыйылғас, ултырғандай булайыҡ.

– Шулаймы? Хәҙер осоп ҡына барып килтерәм уны! Аптырап тормаҫ Рима апайығыҙ. Айн момент!

Ҡыҙмаса булып алған ханымдың үксәһе генә ялтырап ҡала.

Ашығып килеүҙән биттәре ҡыҙарып бешкән ҡатын, саҡ-саҡ тын алып, аҡсаһын һона:

– Һылыуым, миңә лә бер “За жизнь”ды бирегеҙ әле.

– Берҙе түгел, унды бирер инем, бөттө шул, – ти һатыусы, уны йәлләп. – Аҙаҡҡыһын һинән алда ғына анау ир эләктерҙе.

– Ошо ир ишаратымы? – Рима ханымдың асыуы йөҙөнә бәреп сыкты. – Минең өләшкә төшәсәк араҡыны оялмайынса ошо бәндә алып һыҙырға уйланымы? Ҡара һин уны, нахал. Не выйдет! – Ҡатын йоҙроҡтарын һауала болғап, ер тибеп, боғаҙ йыртты: – Һыйлы саҡта был “ярты”ны миңә биреп ҡотол да тай бынан!

“Ошо” тигәне ошо уҡ ауылда йәшәүсе Әхнәф Фәйзуллин ине. Ул да да бер сама һуҡмыш.

– Тынысланығыҙ, бер үк тынысланығыҙ.

Мейеһенә апаруҡ шайтан һыуы инеп ултырған ханымға был иҫкәрмә стенаға борсаҡ һипкән кеүек ине.

Кем инде ҡулына килеп инә яҙған нәмәне икенсе кешегә биреп ебәрһен. «Тормош өсөн» үҙенә лә бик кәрәк, уның да ауыҙы бар.

– Әле һин шулаймы, бирмәҫкә уйлайһыңмы? Ах, һин, оятһыҙ.

Ир һүҙ әйтергә лә өлгөрмәй ҡала, Римабыҙ тоҡанып китмәһенме. Ул бар көсөнә Әхнәфтең кейеменән матҡып ала ла этеп ебәрә. Әллә нисәмә һыйырҙың еленен тартыуҙан ҡатындың көсө ташып тора шул. Әхнәф иҙәнгә сатай-ботай барып төшә. Шул ыңғай һыуытҡыстың быялаһы салтыр-сылтыр иҙәнгә ҡойола.

– Иҙмәнде иҙәм бит, хәҙер, ошонда кәтлит булып ҡаласаҡһың. Туғандарың һөйәгеңде килеп алыр. Инәйеңде былай... – Батыр ханым ирҙе тотоп алып, башын иҙәнгә төйә башлай...

«Тормош өсөн» көрәш шулай аяуһыҙ була.

«Барҙым, күрҙем, еңдем» мажараһы ошоноң менән тамамланһа ла, суд залында Рима ханым улай тип әйтә алманы...

**И. ХАҠОВ.**

А. ӘНҮӘРОВ



**– Гәйнулланы алығыҙ, тик һырабыҙҙы ҡалдырығыҙ!..**
– Гайнуллу забирайте, только пиво оставьте!..







# Дуҫтар күстәнәсе

**“CARICATURA.RU” интернет сайтынан.**











Ҡала уртаһындағы өс бүлмәле фатирҙы бүлгеләп, үҙебеҙҙең балаларҙың йәшәү рәүешен рәтләргә булдыҡ. Яңы фатирҙа йәшәй генә башлағайныҡ, ҡатын хат тотоп инде лә:

– Эх, осоҡ, күсенеп өлгөрмәнек, үҙенә хаттар ҙа килә башланы, хәстрүш, етмәһә мөхәббәт хаттары, мә уҡы, – тип миңә һондо. Ҡарайым, ниндәйҙер Рая исемле ханымдан, етмәһә Мәскәүҙең үҙенән. “Бәгерем, һөйөклөм, бер генәм, һине генә яратам, үлеп һине һағындым...”, тип яҙғанын уҡығас, әллә нишләп киттем...

Ике көн уҙманы, тағы ла хат – Ҡырымдан, Валентина исемле ханымдан: “Һин ҡайҙа йәшәйһең?” – тип һорай быныһы. Ҡайҙан тапҡан улар минең адресты? Баш етерлек түгел....

Ҡатынды көскә тынысландырҙым.

Бер аҙ ваҡыт уҙманы, Ҡарағанданан тағы ла хат килеп төштө, ул Гөлсирәнән булып сыҡты.

– Хантимер бәгерем, һағындым, һинең ҡосаҡлап

# Ҡунаҡта

(Булған хәл)

Әхирәтем телефон аша ҡунаҡҡа саҡырҙы ла:

– Һуңлай күрмә, сәғәт икегә килеп ет, зинһар, юл ыңғайында, бер банка майонез алып ҡына кил, – тип йомошон да әйтергә онотманы.

Ҡунаҡҡа кем йөрөргә яратмай: саҡырған ваҡытҡа барып та еттем. Фатирында бер ҡунағы ла булмай сыҡты. Үтә иртә килгәнемә уңайһыҙланып киттем. Ләкин әхирәтем борсолорға ваҡыт ҡалдырманы:

– Как раз ваҡытында килдең, основной ҡунаҡ килгәнсе, икәүләп өҫтәлде әҙерләйек, – тип мине эшкә ҡушты. Ҡамыр баҫырға, унан бер табаҡ картуф, байтаҡ ҡына кишер, һуған әрсергә тура килде. Нихәл итмәк кәрәк, матур ғына кейемдәремде йәлләй-йәлләй ҡушҡан эштәренең һәр береһен башҡара торҙом.

Ас ҡорһаҡ үҙен һиҙҙерә башлаһа ла, әлеге мин баҫҡан туҡмас янына килдем. Ҡараһам, ул кипмәгән, нисек киҫергә тип аптырап торған арала, әхирәтем уны алды ла йылытҡыс батареяға элеп тә ҡуйҙы. Аптырауҙан ике күҙем дүрт булды. Ғүмерҙә ундай ысул менән туҡмас киптергән кешене күргәнем юҡ ине әле. Бәй, бер нисә минуттан туҡмас кибеп тә сыҡты. Тик уны киҫеү ҙә минең елкәгә төштө. Уны киҫкән һайын әхирәтем, ҡара, уны, туҡмасың йоҡа булһын, тип киҫәтә-киҫәтә торҙо.

Эшләй-эшләй эт булып арыным, табында ултырырлыҡ хәлем дә, ашарлыҡ әмәлем дә ҡалманы тиерлек. Өҫтәлде әҙерләп бөтөүгә иң ҡәҙерле ҡунаҡтар ҙа килеп етте. Улар көлөшә-көлөшә матур итеп биҙәлгән өҫтәл артына инеп ҡунаҡланылар. Уларға ҡарап ултыра торғас, шундай шәп уй килде: минең башҡа тай типмәгән бит әле, һауыт-һаба йыуырға ҡушмаҫ борон, бынан тайыу яғын ҡараным. Мәжлестә йүнле ултыра ла алманым, арманһыҙ булып, саҡ өйөмә ҡайтып йығылдым. Бына һиңә ҡунаҡ!

Хәҙер әхирәтем саҡыра башлаһа, берәй һылтауын табып бармай ҡалыу яғын ҡарайым.

**Л. САЙРАНОВА.**
Өфө ҡалаһы.

# Хафаға һалған хаттар

үбеүҙәрең төштәремә керә, – тип яҙа был, ҡәһәрең.

Хатты уҡығас, Рәйфәм көкөрт кеүек тоҡанып:

– Һин, әллә ҡайҙарҙа һепрелеп йөрөгән нәмә! Бер генә түгел, биш-алты ҡатының булған! Тыуған яҡ тип түгел, алименттан ҡасып ҡайтҡанһыңдыр һин! Тапмаҫтар тип уйлағанһыңдыр, сволочь, барыбер тапҡандар! Төрөк солтанынан да кәм түгелһең икән, оятһыҙ, хәсис! Һинең таҫма телеңә ышанып, кейәүгә сыҡҡан мин, йүләр, эй, ахмаҡ булғанмын! – тип иларға тотондо.

– Юҡ менән башымды ҡатырма әле, зинһар өсөн! – тип ялбарып та ҡарайым. Юҡ, туҡтатып буламы ни бер ҡыҙған бисәне.

– Бына, паспортты ҡара, һинең менән яҙылышҡандан башҡа берәй штамп бармы? Юҡ!

– Яҙылышмай ғына торған-

**Хикәйә**



һыңдыр был бисәләрең менән, һеҙ ирҙәргә ышанһаң...

Ир-ат исеменә тап төшөрөрҙәй һүҙ сыҡҡас, мин дә түҙмәйенсә, бик ҡаты ғына бәрелеп, әйтәһен әйттем үҙенә...

– Былай булғас, мин һинең менән йәшәмәйем, айырылышам!

Ун биш минутта минең кейем-һалым һалынған төйөнсөктәр, һаҙлыҡ түмгәктәре һымаҡ, залда теҙелешеп тора ине инде. Күрәм – эш хөрт. Юҡтан ғына ғаилә тарҡала бит...

Ошо саҡ тағы ла кемдер ишек ҡаға. Үҙем: “Әгәр почтальон тағы бер хат килтерһә, ун биш тәүлеккә ултыртһалар ултыртырҙар, иҙмәһен иҙәм”, – тип уйлап ишекте барып астым. Ҡараһам, ҡаршымда йәш кенә егет баҫып тора.

– Һаумыһығыҙ, ағай, мин Вәхитов Хантимер булам, – тине ул. – Элек был квартирала беҙ йәшәй инек. Почта адресын күсерергә өлгөрмәнек, миңә хат-маҙар юҡмы?

Мин өнһөҙ ҡалдым. Нимә әйтергә лә белмәйем. Тура килһә лә килә икән, эй! Исемебеҙ ҙә, фамилиябыҙ ҙа бер. Бына кем икән беҙҙең ғаиләнең тыныслығын боҙоусы!

Беҙҙең һөйләшеүҙе ҡатын да тыңлап торҙо, әлбиттә. Шунан миңә ҡысҡыра:

– Нимә ҡарап ҡаттың? Әйҙә, төйөнсөктәрҙе сисергә булыш!.. Әҙәм аҡтығы!..

Күрәм, тегенең асыуы һаман бөтмәгән. Ҡыҙған ҡатын, ҡыҙған табанан кәм түгел, тиҙ генә һыуынып бармай шул.

**Дим ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**




**А. ЛЕВИТИН**





М. ҒАФАРОВ

## Әйттем-бөттө!

- Ҡулынан эш килмәгәндәр кәңәш бирергә әүәҫ.
- Хеҙмәт хаҡын алған көндө ялҡау мотлаҡ эшкә килә.
- Тәнҡит яратмаған түрә үҙен маҡтаусыны ғына яҡын күрә.
- Хәтерһеҙ етәксе башҡаларҙың үтенесен онотһа ла, үҙенә кәрәген онотмай.
- Өҫтөнә күләгә төшөүҙән ҡурҡҡан  кеше ышыҡ урынға ғына ултыра.

И. ҒӘРӘФИ.

✦Мәрәкә

# Важный ергә ҡунаҡҡа...

Училищела уҡығанда дүрт егет бер бүлмәлә йәшәнек. Бер беребеҙҙе белеп бөтмәгәнбеҙ әле. Уҡый башлағанға дүрт ай ғына шул. Бер ваҡыт шулай, кис еткәс, Вәлит ҡабаланып килеп инде.

– Егеттәр, бик важный ергә ҡунаҡҡа бараһым бар, зинһар, ярҙам итегеҙ әле, – тине. Шунан койка аҫтынан сумаҙанын тартып алды ла затлыраҡ кейемдәрен соҡоп сығарҙы.

Мин унының салбарын үтекләй башланым. Рафаэль ботинкаһын таҙартырға тотондо. Тимерхан сумкаһынан одеколонын, лосьонын сығарҙы. Вәлит лосьон менән битен, елкәләрен һөрткөләне. Хәҙер инде ул тәтәй кеүек кейенеп алды ла костюмына мул ғына итеп одеколон һиптерҙе.

Ишектән сыға башлағас:

– Йә, инде Вәлит әйт, ҡайҙа киттең? – тип ҡыҙыҡһындыҡ.

Ул бик серле итеп ҡарап торҙо ла:

– Ҡайҙа ла, ҡайҙа, тип башты ҡатырҙығыҙ, ҡайҙа булһын, батшалар йәйәү йөрөй торған ергә, – тип ҡабаланып сығып китте.

Мин – үтек, Рафаэль щётка тотҡан килеш аптырап тороп ҡалдыҡ. Тимерхан одеколонына ҡарап уфтанып ҡуйҙы.

**Булат ЙЫҺАНУРОВ.**
Дыуан районы.

Май ҡояшы ҡыҙарып байып барғанда ишек ҡаҡтылар. Мәктәп директоры Өмөтбай ағайҙың башта бүлтәйеп сыҡҡан ҡорһағы, унан өс эйәкле түңәрәк йөҙө күренде. Ҡулына тос ҡына төйөнсөк тә тотҡан.

– Һау ғынамы, Илфат мырҙам, нисек кенә йәшәп ятыу, үҙең таҙаһыңмы, мал-тыуар имененме?

– Арыу әле, – тип мығырланы Илфат быҒаса тупһаһы аша үтеү түгел, биргән сәләмде лә теләр-теләмәҫ кенә алған ҡунағы алдында нишләргә белмәй.

– Тотаһыңмы берҙе? – Ҡунаҡ бер центнер тартҡан кәүҙәһе менән иҙәнде ыңғыраштырып түргә үтте лә лып итеп диванға ултырҙы. Унан яуап та көтмәй, төйөнсөгөнән аҡбаш алып, өҫтәлгә шапылдатып ҡуйҙы, банкаһы менән тоҙло ҡыяр, ҡурылған тауыҡ сығарып теҙҙе. Аптырашынан күҙҙәре түңәрәкләнгән, телдән ҡалған Илфатҡа ҡарамай ғына бер стакан зәмзәм һыуы ҡойоп, ыңҡылдатып эскәс, ярты ҡыярҙы алып кетерләтте лә йорт эсен байҡап сыҡты. Бары тик шунан һуң ғына моңһоу ҡарашын йорт хужаһына төбәне.

– Илфат мырҙа, ҙур йомош менән килдем һиңә.

– Ә-ә, баҡса һөрөргәме, иртәгә үк барып етермен, соляркаң ғына булһын, “Беларусь” ен кеүек эшләй ул минең.

– Йомош ҙурыраҡ шул, ҡустым, ул баҡсаны көрәк менән үҙем ҡаҙып сығырға ризамын, һүҙемде тыңлаһаң. – Өмөтбай ағайҙың һағышлы ҡарашынанмы, әллә ҡояш офоҡ артына юғалғанғамы, – өй эсе ҡараңғыланып китте.



# Ҡотҡарыусы

**Хикәйә**

Уның көрәкте инде ун-ун биш йыллап таянып торор өсөн генә файҙаланғанын белгән Илфаттың йөрәге һулҡылдап ҡуйҙы:

– Аңланым, Өмөтбай ағай, йортоңа төкәтмә буратам, тигәйнең бит әле, ташып бирергәме?

– Эй, ҡустым, ҡустым, төкәтмә ерунда ул, ауыл яҙмышы хәл ителгәндә. Һүҙемде тыңлаһаң, ярты хаҡына һиңә бирәм ул бүрәнәләрҙе. – Өмөтбай ағай ауыр уфтанып ике ҡулы менән башын тотто.

Илфат ҡорт саҡҡандай урынынан һикереп торҙо ла ҡулдарын күтәрҙе:

– Өмөтбай ағай, яҙалама мине, давай, тиҙерәк йомошоңдо әйт!

– Зәбирә килен Йәнүренән айырылып, ауылдарына ҡайтып китергә йөрөй. – Өмөтбай ағайҙың ике битенән ағып төшкән ике йәш бөртөгө суп итеп иҙәнгә тамды.

Ул тултыра һалып йәнә бер стаканды эсеп ҡуйҙы, был юлы закуска ла ҡабып торманы.

– Бәй, ҡайтһын да китһен, аҙналар буйы запойҙа йөрөгән Йәнүргә кем сыҙар, тиһең?

– Ал һин шул Зәбирәне, ҡустым, егәрле ҡатын ул, бешергән аштарын да маҡтайҙар, холҡо ла бына тигән, давай, тәүәккәллә, ә? – Мәктәп директоры өмөт тулы ҡарашын йорт хужаһына төбәне.

Илфат ағарынып китте.

– Минән ун йәшкә оло бит ул, ишшеү өс балаһы бар!

Өмөтбай ағай ҡулын иплә кенә уның яурынына һалды.

– Өс балаһы булған өсөн ҡоҙалайым да инде, өсөһө лә мәктәптә уҡыйҙар бит. Улар китһә, балалар һаны тулмай тип сентябрҙән мәктәпте башланғыс итеп кенә ҡалдыралар йәки бөтөнләй ябасаҡтар. Мәктәп бөтһә, ауыл бөтә, ҡустым. Зәбирә килен өс балаһын эйәртеп Йәнүргә килгәс, ҡыуаныуҙарым оҙаҡҡа барманы шу-ул...

Өмөтбай ағай һулҡылдап илап ебәреүҙән көскә тыйылып ҡалды.

– Һуң, бер минме ни, әнә, Зариф менән Ғәләү ҙә холостой, уларҙан башҡа ла егермеләп мужик бисәһеҙ йөрөй, – тип аҡлана башланы Илфат.

– Зарифта кисә кис, Ғәләүҙә бөгөн иртән булдым, яҡын да килмәйҙәр, Алланың ҡашҡа тәкәләре тиерһең, өйөрлә алкаш! Бүтәндәрен әйтеп тә тормайым. Иң лайыҡлы кандидатура һин! Зәбирә лә әйткән, ауылығыҙҙа Илфатҡа ғына барһам барырмын, тигән. Уға уҡытыусылар делегацияһын ебәргәйнем, шундай яуап алып ҡайттылар. Бөтә өмөт һиндә, ҡустым, ауылды ҡотҡара күр!

Йәйге төн бигерәк ҡыҫҡа була шул. Ана бит, әле генә көнбайышта офоҡтар артына йәшенгән ҡояш һә тигәнсе көнсығыштан килеп тә сыҡты. Бәләкәй генә ауылдағы бәләкәй генә йортта гәпләшеп ултырған ике иргә лә, бына, ошо төн етмәй ҙә ҡалды.

**Марат ӘМИНЕВ.**




**– Нәмә кәрәк уға?**
**– Майға сыҙаша алмай...**

– Чего он хочет?
– С жиру бесится...




## Әйттем иһә кайттым

● Башҡаларҙы батырыу – үҙең күтәрелеүҙе аңлатмай.

● Эш күрһәтә белгән кеше ҡайһы саҡ теш тә күрһәтә белә.

● Дөрөҫ юлдан барыуыңа ышаныу өсөн ҡайһы саҡ хата юлдан барыу ҙа ярҙам итә.

● Ашыҡҡан – ашҡа бешкән, тиҙәр, тик ашыҡмағандың бешерлек ашы ла булмай.

● Өндәшмәҫкә өйрәнеү – һөйләшергә өйрәнеүҙән ауырыраҡ.

**Р. МӘЙМҮНОВ.**

## ☺☺ Уймаҡ хикәйәләр ☺☺

### Тел бәләһе

Фәнис һәр ваҡыт принципиаль, ғәҙел булырға тырыша. Колхоз быны үҙ иҫәбенән шофёрлыҡҡа уҡырға ебәрә. Ҡайтҡас, колхоз рәйесе уны үҙен йөрөтөргә эшкә ала. Шатланып эшләргә ине лә бит, юҡ шул, әлеге дөрөҫлөккә ынтылыуы уны юҡҡа сығара ла ҡуя.

Бер көн рәйес: “Беҙ иртәгә Өфөгә китәбеҙ, һин мине иртәнге сәғәт  һигеҙҙә өйгә килеп ал”, – ти.

Фәнис:

– Үҙең  гел экономия тураһында һөйләйһең, ә үҙең ауыл осондағы өйөңә килергә ҡушаһың. Юҡ инде яғыулыҡты әрәм итеп өйөңә барып тормайым. Сәғәт һигеҙҙә үҙең  правление алдына килеп ет! – тип ебәрмәһенме.

Рәйес:

– Өфөгә алып барырға бүтән шофёр юҡ! Алып бараһың! Тик ҡайтыу менән мин һине уволить итәм! – ти, ныҡ ярһып.

Ҡайтҡас, Фәнис ғәфү үтенһә лә рәйес әйткән һүҙендә ныҡ тора. Юҡтан ғына халыҡ “тел бәләһе – ғүмерлек һәм үкенерлек”, тимәгән бит.

### Эҙләр ҡатын түгел

Бер ир милицияға ҡатыны юғалыу тураһында ғариза килтерә. Милиционер айырым билдәләре тураһында ентекләп һораша, ә ир яуап бирә:

– Бәләкәй генә буйлы, аяҡтары кәкре, сәстәре һирәк кенә, күҙҙәре ҡылый, тештәренең яртыһынан күберәге тимер... Ир һанай-һанай ҙа, ҡулын һелтәп:

– Юҡ,  эҙләмәгеҙ инде һеҙ уны! – тип сығып китә.

### Онотоп киткән

Беҙҙең ауылда “р” өнөн әйтә алмаған егет йәшәй ине. Иген тейәп, тирмәнгә барырға сыға бер саҡ. “Ҡайҙа киттең?” тигәнгә “тирмәнгә” тип әйтә алмағас, ул:

– Мельница пошёл, он эшләйем, – тип яуаплай.

Тик ул бер эскән ваҡытында “р”ҙы әйтергә ямағанын онотоп киткән дә:

– Сабата үрергә өйрәт әле миңә, – тиеүгә:

– Игендегә (“ирендерә” тиәһе урынға) бит әле, – тип кенә ебәрә.

### Ҡартлыҡ бәләһе

Беҙҙең яҡта бер әбей поликлиникаға килеп, курткаһын гардеробҡа элеп, табип бүлмәһенә инеп китә. Ҡаралып сығып, номерын биреп, курткаһын кейә лә, кеҫәһенән номерын эҙләп, поликлиника буйлап байтаҡ йөрөгәндән һуң, тағы гардеробҡа әйләнеп килә:

– Ҡыҙым, номерымды юғалттым, кейемемде бир инде, – ти.

– Курткағыҙ өҫтөгөҙҙә бит

Әбей кеткелдәп көлгән була ла:

– Бәй, шулай икән дә, өҫтәүенә, үҙемдеке... Ҡартлыҡ бәләһе, ҡыҙым, ғәфү  ит, – тип сығыу яғына ыңғайлай.

**Зинәйҙә ДИНИСЛАМОВА.**




**А. ЛЕВИТИН**

## Көлгәнгә – көлкө

☺☹☺

Кейәү кеше, ғәҙәтенсә һуҡмыш, эскәмйәгә ҡайнағаһы янына килеп ултыра.

– Йә, хәлдәр нисек, ҡайнаға?

– Хәрт, кейәү, ауыртмаған ер юҡ.

– Не может быть! – тип кейәүе кеҫәһенән шешә башы күрһәттә.

– А-а-а-й! Йүнәлеп тә китермен әле! – тип шатлана “ауырып “ ултырған ҡайнағаһы.

☺☹☺

– Апай, теш ҡуйҙырып алһаңсы.

– Ҡуйҙырмайым, бер башыма ике теш еткән. Әтеү хәҙер теш ҡуйҙырыуға бер һыйыр китә бит.



☺☹☺

Олатай ныҡ ауырып ята. Ике күршеһе хәл белә ингәндәр.

– Ясин уҡытайыҡ, еңелерәк булыр, – тине береһе:

– Ҡуй, үлмәй ҡуйһа, хәйер аҡсаһы әрәм булыр, – ти, икенсеһе.

С. СӨЛӘЙМӘНОВА.

☺☹☺

– Өҫ-башың ниңә шул тиклем сүпләнгән?

– Сәстән ҡауаҡ ҡойола.

– Ә мин, тапшырған отчётыңа ҡарағанда, кәбәк, тип уйлағайным.

☺☹☺

Ике терапевт һөйләшә:

– Ай буйы берәүҙең бауырын дауалағайным, йөрәк сире менән үлеп китте.

– Ә мин берәүгә “һары ауырыуы” тип, диагноз ҡуйғайным, ҡытай кешеһе булып сыҡты.

☺☹☺

Ҡала ситендә рәссам тәбиғәт күренештәрен һүрәткә төшөрөп ултыра. Уның эргәһенә малайы менән бер ир килеп баҫа ла:

– Күрәһеңме, улым, цифровигы булмағас, мужик нисек этләнә, – ти.

☺☹☺

Почта бүлегендә:

– Хатығыҙ бигерәк ауыр. Тағы бер марка йәбештерергә тура килер.

– Хәйләләшмәгеҙ, марка өҫтәгәс, конверт тағы ла ауыраясаҡ бит.

Х. ӘХМӘТЙӘНОВ.

### Туҙға яҙмағандарҙан

*“Осеменаторҙың запойҙа булыуы арҡаһында ярты һыйыр кыҫыр калды”.*

(Сығыштан).

*“Дүшәмбе һәм шишәмбе – ирҙәр көнө, шаршамбы, кесе йома һәм йома – катындар көнө, шәмбе – инженер-техник хеҙмәткәрҙәр көнө”.*

(Мунсалағы иғландан).

*“Авария һөҙөмтәһендә катафалка машинаһы күперҙән осоп төшкән. Шулай ҙа, бәхеткә каршы, шофёр менән мәйет иҫән калған”.*

(Протоколдан).

Х. АЙТУҒАНОВ йыйҙы.

## ХӨРМӘТЛЕ ДУҪТАР!

Йәй башында, витамин етешмәгән осорҙа, ғәҙәттә, ҡайһы бер кешеләрҙең хәтере насарайып китеүсән була. Шуға күрә “һәнәк”кә яҙылырға онотоп йөрөгән иптәштәрҙең хәтеренә төшөрәбеҙ:

**Икенсе ярты йыллыкка “һәнәк”кә яҙылыу дауам итә!**


**һӘНӘК**
№ 6 (1201)

ISSN 0208–094X

“ХЭНЭК” (“ВИЛЫ”)
Ежемесячный журнал сатиры и юмора на башкирском языке.
Издается с сентября 1925 г.

Журналдың ойоштороусыһы:
Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ

**Адрес редакции:** 450079, г. Уфа, ул 50-летия Октября, 13, “Хэнэк” (“Вилы”).
**Телефондар:**
Баш мөхәррир 272-91-02
Баш мөхәррир урынбаҫары 272-52-82
Бүлектәр 272-87-43, 272-52-82

Подписка на журнал принимается без ограничений на всей территории страны.

Беҙҙең сайт: henek.pressarb.ru **Индекс 73456**

Мәҡәләләрҙә килтерелгән факттарҙың дөрөҫлөгө өсөн уларҙың авторҙары яуаплы.

**Баш мөхәррир Марсель СӘЛИМОВ**

Мөхәрририәт һәм редакция советы:
Александр АНДРЕЕВ (биҙәлеш бүлеге мөхәррире), Венер ИСХАҠОВ (фельетондар бүлеге мөхәррире), Риф МИФТАХОВ (әҙәбиәт бүлеге мөхәррире), Марат ӘМИНЕВ (яуаплы сәркәтип), Рәзилә ЫРЫҪҠУЖИНА (хаттар бүлеге мөхәррире), Хәлил ӘХТӘМОВ (баш мөхәррир урынбаҫары), Артур ВАСИЛОВ, Мансаф ҒИЛӘЖЕВ, Марат КӘРИМОВ, Рәсих ХАННАНОВ, Венера ХӘКИМОВА, Марат ӘБДҮШЕВ.

ЗОЛОТОЙ ФОНД ПРЕССЫ MMIX

Сдано в набор 12.05.09. Подписано к печати 11.06.09. Офсетная печать. Усл.-печ.л. 2.Уч.-изд. л. 3,56. Формат 70х100 1/16. Зак.№40. Тираж 3593.

Корректор З. МАҘҺАРОВА

Журнал зарегистрирован в Федеральной службе по надзору в сфере связи и массовых коммуникаций. Свидетельство о регистрации ПИ № ФС77-35759 от 26.03.2009 г.



Цена в розницу свободная. © “һӘНӘК”, 2009



Отпечатано в типографии ГУП “Издательство “БАШКОРТОСТАН”.

# Кәләсворд



















**Горизонталь буйынса:** 1. 1-се фото. 4. Мушкетёрҙың ҡоралы. 7. Дедалдың зирәк улы. 8. Алабуғаның йәмһеҙ туғаны. 9. Сиркәү майы. 10. Американың дәүләт ҡоролтайы. 11. Тверь өлкәһендәге ҡала. 12. Дипломатик вазифа. 15. Ашығып яһалған һүрәт. 16. Резервуар, йәки хәрби машина. 19. Караптарҙың ял итеү урыны. 20. Грузия валютаһы. 22. Мәтегә тимер тутығы ҡушып яһалған буяу. 26. Хәҙерге заман алыпһатары. 27. Йөрәк ауырыуы. 29. Караптағы удар өмә. 33. Электр көсән үлсәү берәмеге. 34. Мөгөҙ ҡурай. 35. Һыуҙағы семафор. 36. Коттедж. 37. Мауглиҙың уҡытыусыһы. 38. Танк ҡарышлауығы элементы.

**Вертикаль буйынса:** 1. 40-50-се йылдарҙағы популяр бейеү. 2. Туралған йәшелсә йыйылмаһы. 3. Мимикрия белгесе. 5. Компьютерҙың йөрәге. 6. Төҫтәрҙең, йәки тауыштарҙың зауыҡ менән теҙелеше. 13. Мина йылымы. 14. Һыңғай электрод. 17. Боронғо Греция математигы. 18. Ҡурайҙың джазда уйнаған ҡоҙаһы. 21. 2-се фото. 23. Афроамерикан сығышлы президент. 24. Хәрби коллектив. 25. Шағирҙың дүрт аяҡлы дуҫы. 28. Африка антилопаһы. 29. Боронғо Мәскәүҙең арбалар бата торған урамы. 30. Ике тәгәрмәсле, ике аяҡлы транспорт. 31. Стәрлетамаҡтың танылған заводы. 32. Американдың ҡушаматы. 33. Тропик емеш.

**Хәлил ӘХТӘМОВ төҙөнө.**

## 5-се һанда баҫылған кәләсворд яуаптары

**Горизонталь буйынса:** 1. Харчо. 4. Левитан. 8. Калахари. 9. Синоптик. 12. Серпантин. 16. Марго. 17. Локомотив. 18. Навои 19. Сократ. 20. Як. 22. Тракт. 26. Шадр. 28. Арам. 29. Арба. 30. Гага. 33. Мамба. 36. Инженер. 38. Караченцев. 39. Ют.

**Вертикаль буйынса:** 2. Анализ. 3. Чкалов. 5. Епископ. 6. Ноғоманов. 7. Рантье. 10. Аманат. 11. Гривна. 12. Солист. 13. Рококо. 14. Аммиак. 15. Тито. 21. Корсар. 23. Татра. 24. Манго. 25. Марганец. 27. Битум. 31. Нерв. 32. Меню. 34. Ара. 35. Бра. 37. Че.